✓ Ҡыҙ-ҡырҡындың бурысы: ҡатын-ҡыҙ эшен ентекле үҙләштереү; ризыҡ-тәғәмдең кеше организмы өсөн ҡайһыһы файҙалы булыуын өйрәнеү; татлы телле, әҙәпле булыу; ғиффәтле булыу; ғәйбәт һөйләмәү; өлкән йәштәгеләргә ҡарата хәстәрлекле булыу.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

3-9 МАРТ (БУРАНАЙ) 2007 ЙЫЛ

№9 (219)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күҙе үткер...**

хаталарҙы күрә



4

**Күңел матурлығы...**

тыштан да яҡтырта



6

**Ирле ҡатындың бурыстары,**

йәки Ғаилә усағы янында ике башлыҡ булмай



7

**Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!**

Был оранды ҡатын-ҡыҙҙар яҡлай



8

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15




ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# Илгенәмдең инәләре

## ил-йорт рухын һаҡлай

**Мәҙәниәт йорто сәхнәһендә йә кисәһендә түгел, ә Әбйәлил районының Буранғол ауылында Мәүҙиға апай Ғәбитованың йортонда осраштыҡ был апайҙар менән.**

Кис ултырырға йыйылғайны улар. Дөрөҫөрәге, бынан бер нисә йыл элек фольклор төркөмөнә берләшеп, төрлө мәҙәни сараларҙа ҡатнашҡан, хатта иң сағыу сығыштары менән Өфө тамашасыларын да хайран иткән был әхирәттәр шул саҡтарҙан ҡалған яҡынлыҡты, иҫтәлекте яңыртып алырға, барыһын да иҫкә төшөрөп, һөйләшеп ултырырға йыйылғайны түңәрәк табынға был кистә. Баймаҡтан командировканан ҡайтышлай ғына Мәүҙиға апайға һуғылып, бына ошо күңелле осрашыуға, башҡорт халыҡ аштарынан һығылған мул табынға юлыҡтым. Ихласлыҡ менән осраштым бында. Матурлыҡ менән... Талант менән... Ҡунаҡсыллыҡ менән... Ҡыҫҡаһы, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ысын асылы менән осрашып, бөтмәҫ күңел кинәнесе алып ҡайттым шулай.

- Хәҙер инде бына ял итәбеҙ, - тине Мәүҙиға апай минең "Әле лә бармы, сығыш яһаймы һеҙҙең фольклор коллективы?" тигән һорауыма ҡаршы. - Ауыл советы рәйесе булып эшләгән сағымда бөтөн мәҙәни сараларҙы ошо ҡатындар менән үткәрә инек. Хәҙер ҡартайҙыҡ...

Ҡартайҙыҡ, тигән булып, табындағы башҡа апайҙар ҙа Мәүҙиға апайҙың һүҙен йөпләп ҡуйған була. Ысынлап та, әбей йәшендәләр: 65-75 йәшлектәр. Әммә йөҙҙәрендә лә, ҡылыҡтарында ла, хәрәкәттәрендә лә бер ниндәй ҡартлыҡ та тапмаҫһың. Көйләп тә ебәрәләр, бейеп тә китәләр, ҡумыҙ ҙа сиртәләр. Һөйләгәндәре гел аҡыл, фәһем. Үҙҙәрен әбейҙәр тип иҫәпләһәләр ҙә, биттәрендә йыйырсыҡ та юҡ хатта. Беҙ, ошо апайҙарҙан йәшерәк быуын, тырышып-тырышып төрлө кремдар, маскалар ҡулланып, йөҙҙәрҙәге йыйырсыҡтарҙан арынырға маташабыҙ. Ә был әбейҙәр йәшәрер өсөн бер ни ҙә ҡылмай. Ләкин йәш сырайлы булып ҡала бирә. Ҡайғы-хәсрәтһеҙ йәшәйҙәрҙер, тиһегеҙме? Юҡ, уныһы иһә саманан ашып китә. Уларҙың һүҙенән сығып әйтмәйем быныһын. Берәүһе генә лә шәхси ҡайғыһы тураһында бер генә һүҙ ҙә әйтмәне. Кейер кейемем юҡ, ашар ашым, аҡсам юҡ, тимәне. Пенсия тураһында биргән һорауым да "Аллаға шөкөр", тигән яуап менән, һауала аҫылынып ҡалды. Был апайҙарҙың бар хәстәре ил-йорт тураһында. Ауылдарҙың киләсәге борсой. Ирҙәргә эш булмауы йәндәрен әрнетә. Ул-ҡыҙҙарҙың әхлаҡтан ситләшеүе, рухи яҡтан миктәүе әсендерә. Йолаларыбыҙ, йыр-көйҙәребеҙҙе йәштәргә нисек итеп теүәл һәм тулы тапшырыу хәстәрлеге лә баҫҡан иңдәрен. Хатта халҡыбыҙҙың аш-һыу өлгөләрен әҙерләгәндәге теүәллеккә лә битараф түгел улар. Бына, мәҫәлән, Мәүҙиға апай ике ҡоштабаҡ менән табынға бишбармаҡ килтереп ҡуйҙы. Ваҡ тәрилкәләр өләшеп сыҡты. Йәш килендәрҙән кемдер берәү: "Мәүҙиға апай, бишбармаҡты һоҫорға ҙурыраҡ ҡалағың юҡмы ни?"- тигәйне, Мәүҙиға апай шунда уҡ ҡырт киҫте:"Боҙма йоланы. Бишбармаҡты һәр кем үҙ ҡалағы менән үҙе һоҫоп алһын, оло ҡалаҡ бар, тип, бишбармаҡ ашау тәртибен боҙорғамы ни?" - тийә һалды.

**Бына шундай йолалар, тәрбиә, аҡыл, иң мөһиме, шәхси өлгө аша башҡортомдоң рухын һаҡлай ошо Мәүҙиға Ғәбитова, Вәсилә Садиҡова, Йомабикә Камалова, Сәкинә Хәйруллина, Сәфинә Солтанова, Рәсимә Сәмиғуллина, Мәҙинә Вәлиәхмәтова, Нәсимә Моратова, Фәрзәнә Йәнбирҙина, Тәнзилә Тайыпова атлы апайҙар һәм инәйҙәр. Улар һөйләгәндәр әле киләсәктә яҙасаҡ бик күп яҙмаларҙа сағылыш табыр. Әлегә ошо фотоһүрәтте күрһәтеү маҡсаты менән яҙмамды башлап ҡына ҡуйыуым. Һәм... Ошо апайҙарҙы һәм ил-йортобоҙға битараф булмаған барлыҡ әсәләрҙе, апайҙарҙы байрам менән ҡотлайым.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

МИН ҺИНЕ ЯРАТАМ!

# ТОЙҒОЛАРЫҢ ЯУАПҺЫҘ БУЛҺА ЛА,

## ярата белгәнгә рәхмәтле Хоҙай...

**Нәфис заттарыбыҙҙың күркәм байрамы - 8 март көнөндә генә улар өсөн махсус "Мин һине яратам" тигән рубрика асырға булдыҡ. Дөрөҫөрәге, бындай рубрика асыу хаҡындағы уй-ниәтебеҙ әллә ҡасан уҡ бар ине, уны фәҡәт ошо байрамға тип кенә ҡәҙерләп, сюрприз итеп һаҡланыҡ. Бөгөн уны, бер аҙ үҙгәртеберәк, гүзәл заттарға: "Хөрмәтлеләребеҙ, беҙ һеҙҙе өҙөлөп яратабыҙ!" - тип әйтәбеҙ. Был юлы һеҙҙең иғтибарға ир-аттарҙың һөйгәндәренә һөйөү һүҙен тәҡдим итәбеҙ. Артабан инде унда йәше лә, ҡарты ла, ир-ат та, ҡыҙ-ҡатын да һөйгәненә йөрәк түрендәге иң ҡәҙерле һүҙҙәрен әйтә алыр. Икенсенән, был рубрикала яратҡан кешеңә үҙ тойғоңдо еткереүҙең уникаль һәм эксклюзив мөмкинлеге бар. Ысынлап та, донъялыҡтағы төрлө хәлдәр һәм сәбәптәр арҡаһында күптәр үҙҙәре өҙөлөп яратып йөрөгән кешеләренә һөйөү һүҙҙәрен әйтеүҙән мәхрүм. Рубрика асылда ана шундайҙар өсөн. Оялсандар һөйгәненең һәм үҙенең исемен үҙгәртеп алырға ла мөмкин. Иң мөһиме - һөйөү һүҙегеҙ ихлас, ысын йөрәктән, һөйгәнегеҙҙең һәм уҡыусыларҙың күңелен балҡытырлыҡ булһын! Мөхәббәт һүҙенең жанрына һәм күләменә сикләү юҡ.**



Инде нисәнсе тапҡыр һиңә хат яҙамдыр, күңелдә генә яҙылғандары тағы ла күберәк. Шуны ла беләм: гәзиттә баҫылған ошо хатымды уҡығас, үҙеңә тәғәйенләнгәнгә күрә, тик һин генә уны танып уҡыясаҡһың. Башҡалар өсөн ул оло сер генә булып ҡаласаҡ.

Һин мине донъяла бар, тип тә белмәнең шул. Яныңа барғанда, һис юғы, бер тапҡыр ғына булһа ла күтәрелеп тә ҡараманың. Күҙҙәремә ҡараһаң, барыһын да аңлар инең. Бик ғорур, текә һәм хыял менән дә үрләп етмәҫлек бейеклектә йөҙә инең. Бар ихтыярымды туплап, аҫыл һүҙҙәремде тел осома төйнәп, яныңа әллә күпме тапҡыр барҙым. Әммә һәр саҡ юғалып ҡала, ҡойолоп төшә инем. Кем белә, бәлки тап шул сакта тойғоларымды асып һалырға кәрәк булғандыр ҙа.

Ярай, шул саҡта һиңә йөрәк һүҙҙәремде әйттем дә икән, ти. Әгәр ҙә һин шул сакта үгеләп китеп көлөп ебәрһәң, өмөттәремде кинәт өҙөп ҡуйһаң, ул сағында мин һине хатта ситтән генә булһа ла яратып йөрөүҙән мәхрүм ҡалыр инем. Өмөтһөҙ яратып булмай. Улай тиһәң, ғүмеремдең уртаһында бер көн килеп ҡояш йылмайыуы бындай шиктәремде тағы юҡҡа сығарҙы. Эйе, тап шулай булды. Көндәрҙән бер көндө һин янымa үҙең килдең. Йәшлегебеҙҙең йәшел мәлдәренә ике тиҫтәләп йыл үткәс. Үҙең килдең дә: "Ғүмер ҙә үтеп бара, беҙҙең тарафтарҙа күренмәйһең дә..."- тинең моңһоу ғына итеп. Белһәң ине, шул сағында йөрәгемдең нисек итеп тетрәгәнен. Аяҙ көндө йәшен балҡығандай булды. Йәшермәйем, күҙҙәремдән йәштәр атылып сыҡты. Шул сакта мин бер хәҡиҡәтте ныҡлап аңланым, буғай: тойғоларың яуапһыҙ булһа ла, бер кешене өҙөлөп яратыуың, ҡасан булһа ла, уның юлын һинең тарафҡа үҙе бора икән. Баҡтиһәң, Хоҙай барыһын да белә һәм һинең тоғролоғоңдо юғары баһалап, йәнең теләгәнен яныңа килтерә икән. Тимәк, күптәр юҡ тиһә лә, ысын мөхәббәт донъяла бар икән, берәүҙең генә яратыуы ла, иртәме-һуңмы, икенсеңдең дә йөрәген аса икән. Тойғоларың яуапһыҙ булһа ла, яратыу, мөхәббәт донъяла эҙһеҙ үтмәй икән. Ярата белгәнгә Хоҙай ҙа рәхмәтле икән!

**... Әммә күпкә һуңлап аңлаштыҡ, яҙмыштарыбыҙ башҡаларҙың яҙмышы менән сеймәлеп, сискеһеҙ булып төйөнләшеп бөткәс кенә аңлаштыҡ. Иң мөһиме, беҙ бер-беребеҙ өсөн донъяға яралғаныбыҙҙы аңланыҡ. Хоҙай йәндәребеҙҙе ҡауыштырыр әле.**

ӘНҮӘР.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы -

## милләтебеҙ иммунитеты...

**... мәрйәгә өйләнгән бер халыҡ артисы үҙенең был хәлен шулай аңлата: "Беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары бигерәк ҡырыҫ, эре ҡылана, уларға яҡын килерлек тә түгел. Башҡа милләт ҡыҙҙары иртәнсәк иркәләп-наҙлап, баллы-татлы һүҙҙәр әйтеп, һөйөп уятһа, беҙҙекеләр "Нимә ҡарап ятаһың, тор!" тип ҡысҡыра, төрткөләй башлай. Шуға күрә мәрйәгә өйләндем дә инде..."**

**Кемгә нисектер, миңә ҡалһа, ҡыҙҙарыбыҙҙың ана шулай ҡырыҫ булыуы арҡаһында халҡыбыҙ ҡырылмаһа ҡырҡ ата балаһы йәшәгән Евразия мегаполисында һаҡланып килә лә инде. Ҡырыҫлыҡ беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарға тәбиғәттең үҙе тарафынан һалынған. Ҡырыҫ булмағанды тиҙ яулайҙар. Ҡыҙ-ҡатын холҡондағы ҡырыҫлыҡ ир-аттың уға ҡарата етди булыуын талап итә, уға шаярып, йә юрый ғына яҡынлап булмай. Шуға күрә мин уларҙағы ҡырыҫлыҡты күркәм холоҡтар рәтенә индерәм. Беҙҙең ҡыҙҙар яратҡанда ла, күрә алмағанда ла ысын, тәбиғи булып ҡала беләләр. Тәбиғәттең үҙе кеүек улар, ҡыланмайҙар. Сөнки тәбиғәт ҡыланғанды яратмай.**

**Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: беҙҙең ҡыҙҙар ҙа башҡалар һымаҡ таҫма телле, елбәҙәк булды икән, ти. Өҫтәүенә беҙҙең "яртылаш сабый" ир-атты ла башҡалар ҡулға эйәләштерергә тора. Ул сакта нимә булыр ине, тип уйлайһығыҙ? Йыллап түгел - айлап, айлап түгел - көнләп башҡалар араһында иреп юҡҡа сығыр инек. Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы - милләтебеҙ иммунитеты. Беҙ, ир-аттар ҡырыҫ була алмағаныбыҙ өсөн милләтте һаҡлаусы ошо сифатты мәжбүри рәүештә үҙҙәрендә булдыра улар. Милләт өсөн төп яуаплылыҡ та ҡыҙ-ҡатындарҙа. Шулай булғас, яуаплылыҡ еңел-елпе булмайҙыр инде.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең аграр мәсьәләләр буйынса киңәйтелгән ултырышы үтте. Унда БР Президенты Мортаза Рәхимов та ҡатнашты.

✔Башҡортостандың БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, сәнәғәт, инвестиция һәм инновация сәйәсәте министры Юрий Пустовгаров етәкселегендәге делегация эш сәфәре менән Ҡаҙағстан Республикаһына китте. Осрашыуҙың төп саралары Атырау ҡалаһы һәм өлкәһендә үтә.

✔2006 йыл йомғаҡтары буйынса, БР Хәрби комиссариатының юридик хеҙмәте Волга буйы - Урал хәрби округында иң яҡшыһы тип билдәләнде.

✔БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев Испанияға китте. Илдус Ғәбәйҙулла улы Барселона ҡалаһында үтәсәк Халыҡ-ара тел форумында ҡатнашасаҡ.

✔Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында "Рәсәйҙе һаҡлағыҙ!" тип аталған Рәсәй ижтимағи-мәҙәни марафоны үткәрелде. Унда Рәсәйҙең танылған сәнғәт йондоҙҙары йырсылар Валентина Толкунова, Тамара Гвердцители, Надежда Бабкина, Ринат Ибраһимов, артист Владимир Конкин һәм башҡалар ҡатнашты. Улар Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй составына инеүенең 450 йыллығына арналған сағыу тамашала һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр һәм ижтимағи ойошмалар вәкилдәре алдында сығыш яһаны.

✔"Салауат Юлаев" исемендәге хоккей командаһы Рәсәй чемпионатында Новокузнецкийҙың "Металлург"ын 3:2 иҫәбе менән еңеп, өсөнсө баҫҡысҡа күтәрелде. 11 мартта үтәсәк плэй-офҡа тиклем юлаевсылар тағы ла дүрт матч үткәрәсәк. Бөгөн улар Чехов ҡалаһында -"Витязь", 6-һында - үҙ майҙанында Мәскәү "Динамо"һы, 8-дә Санкт-Петербургта урындағы СКА командаһы менән уйнаясаҡ.

✔БР Журналистар союзының рәсми сайты асылды. Адресы: www. journalistrb. ru.

✔Шағир Хәсән Назар, яҙыусылар Мәрйәм Буракаева, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Зәйнәп Буракаева һәм 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатының 11-се синыф уҡыусылары Эльвира Тулыбаева менән Гөлдәр Ғәлимова Рәми Ғарипов исемендәге премияға лайыҡ булды.

✓ **_Чечен йәмғиәтендә патриархат көслө булыу айҡанлы, һаҡал-мыйығы үҫмәгән, йәғни ир ҡорона етмәгән малай-шалай ололарҙың йомошон үтәүсе сифатында ғына йөрөй._**



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Кемгә нисектер, әммә миңә Президентыбыҙ Владимир Владимирович Путиндың 1 мартта ҡабул иткән бер ҡарары бик оҡшай. Һүҙ Чечня республикаһы президенты итеп Рамзан Ҡадировты тәғәйенләү хаҡында бара. Әлбиттә, Путин үҙе туранан-тура Рамзанды был урынға ултырта алмай, ни тиһәң дә, демократик дәүләттә йәшәйбеҙ бит. Шуға ла ул Ҡадировтың кандидатураһын Чечня парламентына тәҡдим итә генә ала. Йәғни, бына һеҙгә, чечендар, башлыҡ, теләһәгеҙ - һайлайһығыҙ, теләмәһәгеҙ - юҡ. Ә унда иһә депутаттар үҙҙәре хәл итергә тейеш. Улар оҙаҡҡа һуҙманы. Үткән йома Чечен Дәүләт советы Ҡадировты президент вазифаһында нығытып та ҡуйҙы. Шулай итеп, яңы Рәсәй төбәктәре тарихында иң йәш президент үҙ эшен башлап та ебәрҙе.**

# ИҢ ЙӘШ ПРЕЗИДЕНТ

## атаһының эшен дауам итмәксе

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Рамзан Ҡадиров инде күптән Чечняның башлығы булып иҫәпләнә ине. Һәр хәлдә, үткән ике йыл эсендә Рәсәй ваҡытлы матбуғат сараларында был республиканың элекке президенты булған Алу Алхановка ҡарағанда премьер-министр Рамзан Ҡадиров тураһында күберәк һөйләнелде һәм яҙылды. Журналистарҙың иғтибар үҙәгендә булыуҙың сәбәбе - Рамзандың үҙендә, уның шәхси һәм эш сифаттарында түгел, ә күберәк уның атаһы Әхмәт Ҡадировтың республикала һәм Рәсәй етәкселеге араһында яулаған абруйында. 2004 йылдың 9 майында Бөйөк Еңеү уңайы менән үткәрелгән байрам ваҡытында Әхмәт Ҡадировтың ғүмере ҡыйылғас, бөтәһенең дә ҡараштары уның улына төбәлде. Йәнәһе, был малай өҫтөнә төшкән оло ҡайғынан бөгөлөп төшмәҫме, атаһының эшен дауам итә, ғәйәт ҙур яуаплылыҡты күтәрә алырмы? Атаһының вафаты көндә үк Рамзанды Владимир Путин ҡабул иткәс, күптәр уға президент вазифаһын фаразлап та ҡуйҙы. Әммә ул ваҡытта эш Чечня конституцияһына барып терәлде. Уға ярашлы, республиканың президентына кәмендә 30 йәш булырға тейеш. Рамзандың иһә ул сакта 28 йәше лә тулмағайны. Шуға ла ашығыс ҡына президент һайлауҙарын үткәреп, был урынға эске эштәр министры Алу Алхановты ултыртып ҡуйҙылар. Ә Рамзан Ҡадиров иһә республика хөкүмәтенең премьер-министры посын биләне. Дөрөҫөн генә әйткәндә, шул сакта уҡ Рамзан республиканың ысын етәксеһе булып китте. Бер заман Рәсәй телевидениеһы Чечня баш ҡалаһы урамдарында Рамзан Ҡадировтың аҙым һайын тиерлек эленеп торған фотоһүрәттәрен күрһәтеп, халыҡты аптыратҡайны. Рамзан Ҡадиров ул сакта, халыҡ үҙе теләгәс, әлә инде, мин быға ҡаршы тора алмайым, тип белдергәйне. Күп тә үтмәне, Чечняла халыҡтан һорау алыу үткәрелде. Кешеләр "Һеҙ кемгә ышанаһығыҙ, президент Алу Алхановҡамы, әллә премьер-министр Рамзан Ҡадировҡамы?" тигән һорауға яуап бирергә тейеш ине. Алханов был акцияға ҡаршы сығып маташты, әммә файҙаһы булманы. Ғөмүмән, Грозныйҙа ла, Мәскәүҙә лә Алу Алхановты берәү ҙә тиерлек ысын президент итеп ҡабул итмәне. Ә бит ул Ҡадировтарҙан айырмалы рәүештә, Рәсәйгә ҡаршы баш күтәреп сыҡманы. Үҙенең антына тоғро ҡалып, беренсе чечен һуғышында ла, икенсеһендә лә чечен боевиктары менән алышты. Ҡадировтар иһә аталы-уллы Рәсәй армияһына ҡаршы ҡорал күтәреп сыҡты. Тик һуңынан ғына Әхмәт Ҡадиров Мәскәү яғына күсте һәм үҙенең ҡораллы көстәрен федераль ғәскәрҙәр яғына сығарып, республикала тәртип урынлаштырырға тотондо. Әйтергә кәрәк, ул көс менәнме, һүҙ менәнме, алдына ҡуйылған маҡсатҡа бер ни тиклем ирешә алды. Һәр хәлдә, әлбиттә, Мәскәү ярҙамы менән, Чечняла ҡоторонған боевиктар бер ни тиклем "тынысландырылды", республиканы тәҙекләндереүгә, пенсиялар һәм пособиелар түләүгә үҙәктән аҡса килә башланы. Тик Әхмәт Ҡадиров үҙен генә һаҡлай алманы. Дөрөҫөрәге, улы уны Грозныйҙағы "Динамо" стадионы трибуналары аҫтына һалынған бомбанан яҡлай алманы.

көндәрҙәге мәғлүмәти акцияларының береһе "Донъя ҡатын-ҡыҙы - 2007" халыҡ-ара конкурсында ҡатнашыусы һылыуҙар менән осрашыуы булды. Донъяның иң гүзәл ҡатын-ҡыҙҙары Чечняға килде һәм Рамзан Ҡадиров менән осрашты, тип хәбәр иттеләр мәғлүмәт агентлыҡтары. Улар ижтимағи ойошмалар вәкилдәре, балалар менән һөйләште һәм Ҡадировтың шәхси зоопаркы менән танышты. Бөтә Ер шарынан Рәсәйгә йыйылған ҡатын-ҡыҙҙарҙың Чечняға килеүе был республикалағы именлек һәм тыныслыҡ хаҡында һөйләргә тейеш ине. Тик был юлы ла дыуамал һәм үҙ һүҙле Рамзан матур итеп ойошторолған акцияны юҡҡа сығара яҙҙы. Ул конкурсҡа ҡатнашыусы бер ҡара тәнле ҡатын-ҡыҙға уға кейәүгә сығырға тәҡдим яһаны. Рамзан Ҡадиров өйләнгән, уның балалары ла бар. Әлбиттә, Чечняла һәм Ингушетияла күп ҡатынлылыҡ тураһында күп һөйләнелә. Был сара һуғышта ҡырылған милләтте арттырыуҙың бер юлы тип ҡарала. Әммә чечендар Рәсәй составында ҡалырға теләһәләр, күп ҡатынлылыҡ тураһында уйларға ла мөмкин булмаясаҡ.

Ниңә Мәскәүгә тоғро Алхановҡа ҡарағанда, Ҡадиров уңайлыраҡ, тигән һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ. Алу Алханов милиционер булараҡ, республикалағы хәлде яҡшы белә һәм Чечнялағы ситуацияны тиҙ арала тотороҡландырып

Чечен йәмғиәтендә патриархат көслө булыу айҡанлы, һаҡал-мыйығы үҫмәгән, йәғни ир ҡорона етмәгән малай-шалай ололарҙың йомошон үтәүсе сифатында ғына йөрөй. Халыҡтың бөтә ихтирамы ҡарттарға йүнәлтелә. Улар абруй ҡаҙанған, тормоштоң әсеһен сөсөһөн татыған кешеләр. Уларҙың һүҙе - һүҙ була. Ә Рамзандың әле сак һаҡалы үҫә башланы. Ул әле ҡыҙыулығын тыя алмай, тәүҙә һөйләй, шунан ғына уйлай, дыуамал. Быны бер генә миҫал. Һуңғы арала Рамзан Ҡадиров Рәсәй телеэкрандарынан төшмәне, шикелле. Уның һуңғы булмаясағын аңлай. Ә намыҫлы кеше булараҡ, күҙ буяп ултырырға теләмәй. Рамзан менән хәл башҡасараҡ тора. Уға Рәсәй Геройы исеме, республиканың премьер-министры булыу ғына етмәй. Ул Чечня менән үҙе идара иткеһе килә. Мәскәүҙән килгән аҡсаны тик үҙе генә бүлгеһе килә. Шуға ла амбицияларын тормошҡа ашырыу өсөн ул теләһә ниндәй юл менән республикала тәртип урынлаштырырға ынтыласаҡ. Иң аяуһыҙ һәм ҡаты сараларҙы ҡулланыуҙан тартынмаясаҡ. Ә Мәскәү быға күҙ йомоп ҡараясаҡ. Сөнки федераль үҙәккә бөгөн кәмендә бер йыл эсендә Чечняла тыныслыҡ урынлаштырылыу мөһим. Киләһе йыл Рәсәйҙә президент һайлауҙары. Уға бөтә донъяла иғтибар ғәйәт ҙур буласаҡ. Кавказ тауҙарында бер генә бомба шартлаһа ла, бер генә патрон атылһа ла, уның шаңдауы бөтә донъяға тараласаҡ. Шуныһы - Рамзан Ҡадиров Чечнялағы шеште юҡҡа сығарырға һәләтле түгел. Ул "Чечня синдром"ын көс ярҙамында тәпкәрәк, алыҫҡараҡ йәшереп торорға һәләтле.

Башҡорттарҙың XVII -XVIII быуаттарҙа булған баш күтәреүҙәрен баҫтырыу өсөн батша ғәскәрҙәренең башлыҡтары урындағы халыҡ араһынан аумаҡайҙарҙы эҙләп табып, уларға нишандар (орден-миҙалдар), аҡсалата дәртләндереп, араҡы ҡойоп, ер, мал вәғәҙә итеп, үҙ яғына ауҙарып алған. Тегеләр шатланып риза булған һәм ҡамсы ярҙамында башҡорт ерендә тәртип урынлаштырған һәм мәңгелеккә "бохайырҙар" тигән исем алған. Әҙәбиәттән беләһегеҙҙер, Бохайыр ул бит Салауат Юлаевҡа (ә уның йөҙөндә бөтә башҡорт халҡына) хыянат иткән кеше. Тарихи хәтеребеҙ шул хәтлем көслө, хатта 200 йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, бөгөн берәү ҙә улына Бохайыр исемен ҡушмай. Ҡасан да булһа Рамзан исеме лә чечендар араһында шул уҡ сифатта яңғырамаҫ микән? Хәйер, ул әле йәш, уға утыҙ ғына, ул киләсәкте уйламай.

**Таһир ИШКИНИН.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# УҢҒАН ҠАТЫН...

## ҡар өҫтөндә лә усаҡ яға



**? Ҡатын-ҡыҙ һәм етәксе. Һеҙ ошо ике мөһим вазифаны нисек итеп уңышлы яраштыра алаһығыҙ?**

**Рәйлә ФӘСХЕТДИНОВА, "Ғәлиә" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры:**

- Был ике төшөнсәне ҡапма-ҡаршы ҡуйырға кәрәкмәйҙер, минеңсә. Балалары менән татыу, үҙ-ара аңлашыу тапҡан ҡатын-ҡыҙ, етәксе булған хәлдә лә, эшен тотороҡло ғаиләһе нигеҙендә ҡора алалыр. Балаларын ҡарап үҫтерә алмаған, еңел-елпе, ялҡау ҡатын-ҡыҙҙар ҙа аҙ түгел был тормошта. Ә бит ундайҙар етәксе була алмай. Балаларым мәктәптә уҡыған ваҡытта лә төрлө хәлдәр булды: күреп торам, уҡытыусы дөрөҫ эшләмәй. Әммә нисек кенә булмаһын, уҡытыусыға һүҙ тейҙермәйем. Уҡытыусы насар булыуы мөмкин түгел, тип ипләп кенә аңлатам. Йәғни, әгәр ҡатын-ҡыҙ ғаиләһен, балаларын дөрөҫ юлдан алып бара белә икән, тимәк, етәксе булып та уңышлы эшләй аласаҡ, тигән һүҙ. Тәжрибә менән киләмелер, эш урынында ла тәртип булыуын яратам. Эшкә алған ваҡытта кемдең ниндәй хеҙмәткәр буласағын алдан күреп, белеп торам. Үҙ эшен белеп, еренә еткереп эшләгән кешеләргә ҡырын бер һүҙ ҙә әйтеп булмай, ә инде ғәйәт һөйләп, кеше араларын бутап йөрөгәндәрҙе эштә тотмайым. Эшем еңелдән түгел. Бәхетле ҡатын-ҡыҙ булып өйҙә ултырһың, ял иткем, балаларым менән бергә булғым килә, тип, ҡул һелтәргә еткән мәлдәр ҙә бар. Әммә бер аҙ тынысланғас, эшемде ташлап китеп, тыныс ҡына өйҙә ята аламмы инде, тип, ауырып ятҡан ерҙән дә тороп эшкә юлланам.



**Рәлиә БИКТИМЕРОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында ҡумыҙсыларҙың һәм өҙләүселәрҙең I республика конкурсы башланды. Ул 4 мартта тамамлана.

✓ БР Фәндәр академияһы академигы Марат Аҙнабаев мөхәррирлегендә төҙөлгән "Медицина терминдарының русса-башҡортса аңлатмалы һүҙлеге" баҫылып сыҡты.

✓ Пенсия фондының урындағы идаралыҡтарына әсәлек капиталы юллап, йыл башынан 610 кеше мөрәжәғәт иткән. Уларҙың 432-һе икенсе балаһына, 177-һе өсөнсө һәм дүртенсе балаларына сертификат юллай. Сертификаттар март аҙаҡтарында бирелә башлаясаҡ.

✓ Өфөлә Черниковка биҫтәһендә хоҡуҡ, хужалыҡ һәм гражданлыҡ мәсьәләләре буйынса түләүһеҙ консультация бирә торған тағы бер бюро барлыҡҡа килде. Ул Вологодский урамындағы 30-сы китапхана урынлашҡан. Консультацияларҙы юридик вуҙдарҙың студенттары үткәрә.

✓ Быйыл Өфөнөң Киров һәм Октябрь райондарында берҙәм диспетчер хеҙмәте эшләй башланы. Хәҙер ҡала халҡы слесарь саҡыртыу өсөн торлаҡ-эксплуатация участкаһына түгел, ә ошо хеҙмәттең диспетчерҙарына шылтырата ала. Берҙәм диспетчерҙар хеҙмәтенең телефон номерҙары: Киров районы - 292-11-00, Октябрь районы - 235-66-95.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов эш сәфәре менән Стәрлетамаҡ ҡалаһында булды. Президент яңыраҡ барлыҡҡа килгән Урал быяла компанияһының эше, йөҙ кешегә иҫәпләнгән бала тыуҙырыу йорто һәм яңы мәктәп төҙөлөшө менән танышты. Шулай уҡ "Сода" акционерҙар ойошмаһындағы эштәр ҙә уның күҙ уңынан төшөп ҡалманы.

✓ Сибай ҡала үҙәк дауаханаһы "Сәләмәтлек ассамблеяһы" фондының халыҡ-ара "Профессия - жизнь" премияһы менән билдәләнгән. Премияның символы булған "Шәфҡәтлелек" һыны, "Йәмәғәтселек таныуы" сертификатын һәм "Намыҫ, Батырлыҡ, Ижад, Шәфҡәтлелек өсөн" ордены апрелдә Мәскәүҙә тапшырыласаҡ.

✓ 8-11 мартта баш ҡала Рәсәйҙең иң көслө көрәшселәрен үҙенә йыясаҡ. "Приозерный" физкультура-һауыҡтырыу комплексында көрәш буйынса Бөтә Рәсәй форумы үтәсәк.

✓ **Берәүҙең: "Үлемдән ҡурҡам һәм уны яратмайым", тиеүен ишеткән Хәсән Басри: "Байлығыңды ҡалдырырға мәжбүр булғанға үлемдән ҡурҡаһың. Байлыҡ алдыңдан барһа, артынан барырға ашҡыныр инең", тигән.**



ҺАБАҠТАР

# ТЕГЕ ДОНЪЯҒА...

## машина менән барасаҡмын

Бер мәл хәлиф Мансурҙы себен тешләгән. Асыуынан ни эшләргә белмәгән хәлиф күренекле дини уҡымышлы Джафар әс-Садиҡҡа мөрәжәғәт итеп:

-О, Абдулла улы! Ни өсөн Алла себенде барлыҡҡа килтергән?- тип һорағап.

-Үҙҙәрен әллә кемгә һанаусыларҙың урыны ҡайҙа булыуын күрһәтеү өсөн...

***

Билдәле бер яҙыусынан, шәхси машинаң бармы, тип һорағандар икән, ул "Эйе, бар, тик һуңғы юлға сыҡҡанда ғына машинала барасаҡмын", тип яуаплаған.

***

Әбү Хөрәйрәнән:

-Иртәгә үлерегеҙҙе белһәгеҙ, нимә эшләр инегеҙ? - тип һорағандар.

-Белем алыуымды дауам итер инем...

***

Бер фәйләсүфтән:

- Был донъяла нимәгә еңел генә эйә булырға мөмкин? - тип һорағандар.

-Хыялға эйә булырға мөмкин, сөнки хыялһыҙ кеше булмай.

- Ә донъяла нимә иң ҡатмарлыһы?

- Һүҙ. Ҡайны сакта бер генә һүҙҙе лә аңлауы һәм аңлатыуы бик ҡатмарлы була...

***

Берәүҙең: "Үлемдән ҡурҡам һәм уны яратмайым", тиеүен ишеткән Хәсән Басри, уға: "Байлығыңды ҡалдырырға мәжбүр булғанға үлемдән ҡурҡаһың. Әгәр байлыҡ алдыңдан барһа, артынан барырға ашҡыныр инең", тигән.

***

Бер мәл диндар ҡатын Рабиянан:

Кешенең Аллаһы Тәғәлә үҙенә ҡарата ихтыярынан һәм донъялыкта уға тәғәйенләнгән нәмәләрҙән ҡәнәғәт булыуын нисек белергә?- тип һорағас, Рабия:

-Уны кешегә ебәрелгән ҡайғы һәм шатлыҡтан, йәғни ҡыуанғанда Аллаға рәхмәтле булыуынан, ҡайғы килгәндә рух төшенкелегенә бирелмәүенән һәм быларҙан фәһем ала белеүенән аңларға мөмкин.

Саади Ширазиҙан:

-Нимә ул кеше? - тип һорағас, ул:

-Бер тамсы ҡан һәм меңдәрсә шикшөбһәләр...

***

-Был тиклем белемгә ҡайҙа эйә булдың?- тип һорағандар бер ғәлимдән.

- Һуҡырҙарҙан алдым. Улар алда нимә көтөрөн ныклап тикшермәйенсә, бер аҙым да яһамай.

***

Ярлы булыуына зарланған ҡатынына Әбү Дарда: "Саҡ ҡына түҙ, алдыбыҙҙа шундай бейеклек пәйҙа буласаҡ һәм уға йөгә ауыр булмағандар ғына күтәрелә аласаҡ", тигән.

...ФӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# КҮҘЕ ҮТКЕР...

## хаталарҙы күрә

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Хатаһыҙ ҡала" акцияһына йомғаҡ яһалды.**



- Һигеҙ ай дауамында барған "Хатаһыҙ ҡала" акцияһында вакытында телефон, электр почтаһы, хат аша барлығы 898 хәбәр алдыҡ. Әлеге көндә был хаталарҙың 37 процент самаһы төҙәтелде лә инде. Ә предприятие, ойошмалар етәкселәре өсөн март-апрель айҙарында ошо мәсьәләгә арналған ғәмәли семинар уҙғарыласаҡ, - тине тантанала Өфө ҡала округы хакимиәтенең гуманитар мәсьәләләр бүлеге етәксеһе Ришат Сабитов.

Акцияла байтаҡ кеше ҡатнашһа ла, 30-ҙан күберәк хәбәр ебәргән иң әүҙем алты кеше бүләккә лайыҡ булды. Шуныһы ҡыҙыклы: улар араһында дауахана хеҙмәткәрҙәре лә, укытыусылар ҙа, башҡа һөнәр эйәләре лә бар ине. Мәҫәлән, 30-40 хәбәр ебәргән Ирек Агишев, Гөлшат Закирова, Миләүшә Ҡолмөхәмәтова диплом менән бүләкләнде. Тағы шуныһы: улар "Киске Өфө", "Вечерняя Уфа" гәзиттәренә бушлай яҙыла аласаҡ. Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актерының III урын алған Рәмзил Сәлмәнов кеҫә телефонына, II урын яулаған 116-сы мәктәп укытыусыһы Әнүзә Йомағолова фотоаппаратҡа эйә булды. Ә иң күп - 301 хата тапкан М.Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты укытыусыһы Эльвира Рәхимова еңеүсе тип табылды. Еңеүсегә, вәғәҙә ителгәнсә, сараның иң төп бүләге - телевизор тапшырылды. Сарала еңеүселәрҙең ысын мәғәнәһендә телен, илен, ерен ихтирам иткән, яраткан көслө рухлы шәхестәр булыуына инандыҡ. Шулай булмаһа, хаталарҙы төҙәттереү өсөн ваҡытын йәлләмәй, иренмәй, сабырлығы етеп, предприятиелар, ойошмалар хеҙмәткәрҙәре, етәкселәре менән бәйләнешкә сығып, наҙанлыҡ менән көрәшеп йөрөрҙәр инеме ни? Мәҫәлән, Әнүзә Йомағолова, Миләүшә Ҡолмөхәмәтова, Эльвира Рәхимовалар акция башланмаҫ элек үк хаталарҙы күреп, шул ойошма етәкселеге менән һөйләшеп, уны төҙәттереүгә ирешкән. Ә акцияның рәсми иғлан ителеүе уларға "аяҡ терәп" һөйләшеүгә ярҙам ғына иткән.

**"Хатаһыҙ ҡала" акцияһының тәүге еңеүселәре бүләкләнһә лә, сара быйыл да дауам итәсәк. Изге башланғыстың ярайһы уҡ яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеүе ҡыуаныслы. Акция тап ил, тел тип янған милләттәштәребеҙ тырышлығы менән уңышлы барып сыкты, тап уларҙың тынғыһыҙ, битараф булмауы арҡаһында ҡала урамдарын йәмһеҙләп торған байтаҡ хаталарҙан ҡотолдоҡ, башҡа милләт вәкилдәренә төп дәүләт теле булған башҡорт теленә иғтибарлы булырға кәрәк, тигәндә бер аҙ аңлата алдыҡ, буғай.**

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**

... ҠОЛАҒЫНА

**"Бер кәлимә фекер" рубрикаһында Рәүеф Бикташевтың "Кендек күрһәтеү сәнғәте" (50-се һан, 2006 йыл) тигән мәкәләһе баҫылғайны. Минеңсә, автор бында бик мөһим мәсьәлә күтәрә.**

# Кендегеңдә...

## күҙ тейер бит

Донъя кендеге - Арҡайым, ул Уралда урынлашҡан, кешелек Арҡайым кендеге аша үҙенә йәшәү һуты һәм ҡото ала. Әҙәм балаһы ла, якты донъяға тыуғанға тиклем, әсәһенән кендеге аша туклана, һутлана. Тыуған сағында сабыйҙың кендеген киҫеп, донъялыҡ кендегенә ялғайҙар. Кендек - йәшәү сығанағы, ғүмерҙе туйындырыусы, ҡотҡа ҡойондороусы.

Мосолман ҡыҙ-ҡатындары борон-борондан куҙҙәрен, йөҙөн генә түгел, түшен дә, кендеген дә ят күҙҙәрҙән йәшергән, күҙ тейеүҙән һаҡлаған.

Әммә хәҙерге йәш ҡыҙҙарҙың кендек күрһәтеп йөрөүе күңелде ҡыра. Ҡартсәйем элек: "Биленде һаҡла, кендегең күренмәһен, күҙ тейер, унда бысраҡ инмәһен, йылы кейенеп йөрө. Һиңә кейәүгә сығып, бала табырға кәрәк, кендегенә күҙ тейгәндең балаһы зәғиф булып тыуа", тип әйтә торғайны. Бала сәңгелдәктә ятканында өлкәндәр: "Әсен яп, әсенә һыуыҡ теймәһен, ул ҡыҙ бала бит", - тип әйтә ине.

Хәҙер ҡыҙҙар кендектәрен нисек кенә күрһәтмәй ҙә, нисек кенә биҙәмәй. Сылбыр ҙа тағалар, мәрйен дә йәбештерәләр. Минеңсә, башҡаларға күрһәтер алтын аҡылы, күркәм холҡо, оҙон толомо булмаған ҡыҙҙар кендеген күрһәтәләр ул.

Тағы ла шуға иғтибар итәм: уларҙың кендек күрһәтер өсөн һыпырылған салбарҙары йәлап-йәлап һаман аҫҡа төшә бара. Килер бер көн, ул салбар бөтөнләй сисеп ташланмаҫ тимә. Ул сағында инде... Эш бит шуға бара, йәмәғәт! Иң ҡәҙерле урынын - кендеген күрһәтергә оялмаған ҡыҙ башҡа ағзаһын күрһәтеүҙән дә тартынмаҫ.

Бер юлы күңелде ҡырған тағы бер мәсьәлә хаҡында әйтеп киткем килә. Ниңәлер, башҡорт ҡыҙҡатындарының милли кейемендә салбарҙы күрмәйбеҙ. Ҡыҙҙар бейегән саҡта итәктәре күтәрелһә, аяҡтары ялтылдап, бот төптәренә тиклем күренә лә куя. Беҙ бит ҡыҙҙарҙың матур бейеүҙәренән тыш, кейемдәренә һәм үҙҙәренә лә һокланырға тейешбеҙ. Башҡа төрки халыктарҙың милли кейемендә ҡыҙ-ҡатындарҙың салбары әле лә һаҡлана бит.

Һүҙемдең аҙағында шуны әйткем килә: ҡыҙҙар, үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ, һеҙҙән тора милләтебеҙҙең барлығы ла, байлығы ла.

**Рита ЯҘЫҠБАЕВА.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә ҡала йәшәйешен тәьмин итеү идаралығы начальнигы Ирек Ялалов әйләнә-тирә мөхитте һаклау мәсьәләләре тураһында мәғлүмәт бирҙе. Билдәләнелеүенсә, баш ҡала биләмәһендәге иң етди проблема - ул һауаның төрлә ҡалдыктар, башлыса транспорт яғыулыгы ҡалдығы менән бысраныуы. Унан һаҡланыуҙың һөҙөмтәле сараһы - ул ағастар. Шулай уҡ Салауат Юлаев проспектында яңы юлдар төҙәү ҙә был мәсьәләнең көсөргәнешен йомшартыуға булышлыҡ итә.

☑ Баш ҡалабыҙҙың һәм республиканың сәнәғәт үҙәге - Орджоникидзе районы үҙенең 55 йыллыҡ юбилейын үткәрҙе. Химиктар мәҙәниәт һарайында үткән тантанала БР Президенты Мортаза Рәхимов ҡатнашты.

☑ Совет районында сығып килгән "Уфа-центр" һәм "Өфө- үҙәк" гәзиттәре муниципаль учреждение статусы алды.

☑ Баш ҡаланың Карл Маркс урамындағы Үҙәк универмаг бинаһы яңынан үҙ ишектәрен асты.

☑ БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Башҡортостан Халыҡтар дуҫлығы йорто һәм "Аҡ тирмә" Башҡорт милли-мәҙәни үҙәге 10 мартта Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Науруз байрамы үткәрә. Башлана 15.00 сәғәттә.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Хәлимов журналистар менән осрашыуҙа баш ҡалала төҙәлеш барышы тураһында һөйләне. Билдәләнелеүенсә, былтыр Өфөлә 521,7 мең квадрат метр, унан алдағы йыл менән сағыштырғанда 11 процентҡа күберәк, торлаҡ йорт файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Быйыл был һан 20 процентҡа юғарыраҡ буласаҡ, тип көтөлә.

☑ Баш ҡала ихаталары металл гараждар ҡамауында һәм улар бар яҡтан ҡамасаулыҡ тыуҙыра. Ошо проблеманы хәл итеү өсөн Сипайлово биҫтәһендә автомобилдәр ҡуйыу өсөн күп ҡатлы ике махсус гараж төҙөлә. Улар халыҡҡа арендаға биреләсәк. Был тәжрибә уңышлы үтһә, быңдай гараждар башҡа райондарҙа ла төҙөләсәк.

*ДОНЪЯ – ҠУЛАСА*

# Ауыҙ һыуҡайы ла бал икән,

## Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән...

**Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се Республика балалар йортоноң 85 йыллыҡ юбилей кисәһенә китеп барғанда моң кеүек яңғырашлы ошо матур һүҙҙәр хаҡында ҡабат-ҡабат уйландым. Ҡарыныңда яралып, йәнгенәңдән һут алып, йөрәгеңде ярып сыҡҡан балаңды япа-яңғыҙы көйө уҫал яҙмыш упҡынына ни ҡулың менән ырғытаһың? Йылан ғына ағас башынан ергә ҡоҫоп, аҡ донъяны яңы күргән сабыйын түбәнгә төкөрөп балалай. Хәйер, хатта хайуандар араһынан миҫал эҙләгәндә лә йыртҡыс тиклем йыртҡыстарҙың балаһын ташлап китмәүен асыҡлайһың. Ә беҙ - кеше...**

**Бынан ике йыл элек миңә ошо йортта тәрбиәләнеүсе балалар менән осрашырға тура килгәйне. Шул саҡта "Әсә йылыһынан мәхрүм булып, яҙмышының әсе ҡырҙарына бәрелеп-һуғылып йөрөгән ошо балаларҙың кескәй генә йөрәгендәге һағыш, әрнеү, үкенес ғазаптарын нисек еңеләйтеп була икән?", тигән уй борсоғайны...**

**Балалар йортонда үкһеҙ етемдәр менән бер рәттән, ата-әсәһе иҫән булғандар ҙа тәрбиәләнә. Тәүгеләренең күңел донъяһын байҡап, Әсә образын нисек күҙаллауҙары хаҡында тоҫмалларға була, ә бына икенселәре ниҙәр кисерә икән? Кешене ғәйепләү, ситтән тороп һүҙ йөрөтөү еңел, үҙҙәре ни әйтер? Ғөмүмән, балалар йортонда үҫкәндәрҙең артабанғы яҙмышы, ҡылыҡ-фиғелдәре, донъяға ҡараштары ниндәй? Байрамға килгән элекке тәрбиәләнеүселәргә ошондай һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек:**



**Эльмира ФӘЙЕЗОВА**:

- Минең был йортто тамамлауыма ҡырҡ йыл самаһы. Бәләкәй саҡта имсәк балалар йортонан ебәргәндәр мине бында. Әсәйем мине "атайһыҙ" көйө тапҡанға күрә, тыуғас та ҡалдырып киткән, тиҙәр. Кеше һүҙенән ҡурҡҡандырмы, йә тормошон яйға һалырға теләгәнмелер. Сәбәп табыла инде. Кескәй сағымда нисек уны һағынғанымды, көткәнемде, әллә ниҙәр һөйләргә тип хыял иткәнемде хәтерләһәм, әле лә ауыр. Иптәштәрем йоҡлаған саҡта, таң беленер-беленмәҫ, тәҙрә төбөнә шым ғына менеп ултырам да ҡапҡа яғына ҡарайым. Хатта ул ҡапҡа минең теләктәремде ишетеүсе тылсым ҡапҡаһына әйләнгәндәй ине. Әсәйемде саҡырып килтерер һымаҡ ине. Килде әсәйем, хәтерләүем буйынса, дүрт тапҡыр килде, ҡурсаҡтар, тәмлекәстәр килтерҙе, тик үҙе менән мине генә алып китмәне. Һуңынан бөтөнләй юғалды. Ҡасандыр килеп алырына барыбер өмөтләндем. Төнгә тиклем шул тәҙрәнән көткән саҡта "Исмаһам, эргәнән үтеп китһен ине", тип теләнем. Аҙаҡтан "Бөтөнләй килмәгәне яҡшыраҡ, китһә, тағы илармын" тип уйланым. Мине ташлап китеүенә әсәйемә үпкәләй инем, әлбиттә, тик барыбер яратыуым көслөрәк ине. Үҙем әсәй булғас, нисектер, онотолдо үпкәм. Эҙләп тә ҡараным әсәйемде, таба алманым, һуңынан гүр эйәһе булыуын ишеттем.

**Гөлнур НУРИЕВА:**

- Мин бик бәләкәй саҡта беҙҙең өй янған, мине нисектер ҡотҡарып, имсәк балалар йортона тапшырғандар. Атай-әсәйемде бөтөнләй белмәйем. Архив документтары буйынса тыуған районымды тапҡас, уларҙың бик эсергә яратыуын, шул йортта янып үлгәндәрен генә белдем. Беҙ үҫкән йылдарҙа балалар йортонда һуғыш ауырлыҡтарын кисергән, кеше яҙмышына нисектер йәлләберәк ҡараған тәрбиәселәр эшләй ине. Ишектән ингәс тә баштан-аяҡ үҙҙәре кейендерәләр, әҙерләп ашаталар, өлтөрәп йөрөп хәстәрлек күрәләр. Шуғалыр ҙа, балалар йортонан сығып киткәс, үҙ аллы тормошҡа әҙер түгеллегемде аңланым. Нефть институтына уҡырға индем, стипендия әҙ булғас, эшләп уҡыр өсөн киске бүлеккә күстем. Дөйөм ятаҡ бирелмәгәс, уҡыуҙы ташланым да заводҡа эшкә урынлаштым. Шул саҡта балалар йортонда уҡ бергә үҫеп, дуҫлашып йөрөгән егеткә кейәүгә сыҡтым, ҡыҙыбыҙ тыуғас, айырылышырға тура килде. Исмаһам, беребеҙ ғаилә тәрбиәһе алып үҫһә, бәлки, тәүге ауырлыҡҡа уҡ бирешмәҫ инек. Беҙ атай-әсәйҙең нисек булырға тейешлеген аңламағанбыҙ. Бер ни тиклем ваҡыттан завод ятағын бөтөрҙөләр. Өс йәшлек ҡыҙым менән урамда ҡалдыҡ, барыр ер юҡ, бергә эшләгән таныштарҙа, йә вокзалда йоҡлап йөрөйбеҙ. Эшем командировкаларға бәйле. Сабыйымды балалар йортона бирергә тура килде, ете йәшенә тиклем шунда үҫте. Яҙмышымдың эстафетаһы түгел был, тормошҡа яраҡлаша белмәүемдең, әсәй булыр өсөн әсәй мөхәббәтен тоймауымдың етешһеҙлеге. Үҙем балалар йортонда, йәғни әсәйһеҙ үҫкән көйө ҡыҙымдың да дүрт йыл ғүмерен шунда үткәреүемде ғәфү итә алмайым. Эх, әсәйле үҫһәм...

**Әминә МӨХӘМӘТЙӘНОВА:**

- Мин биш йәшлек сағымда әсәйһеҙ ҡалдым. Балалар йортонда үҫтем. Унда уҡыу алдынғыһы булып, һәр төрлө түңәрәктәргә йөрөнөм. Яҡшы уҡығандарҙы ял итергә турслетка, сит яҡтарға йөрөтәләр ине. Шул саҡта: "Әсәһе булмағандарға бына нисек балалыҡ шатлығы күрһәтергә тырышалар, ә әсә кеше был бәхетте балаларына бер һүҙһеҙ бүләк итергә тейеш", тип уйланым. Тиңем менән ғаилә ҡороп, балалар үҫтергәндә башҡа әсәләр еңел генә хәл иткән проблемаларҙы мин ҙур ауырлыҡтар менән атҡарҙым. Ирем бар яҡтан да аңлап, ярҙам итеп торҙо. Шул саҡта бөтәбеҙгә лә әсәй булыусы ҡәйнәмә (хәҙер мәрхүмә инде) мең рәхмәтлемен. Ҡыҙымдың кендек инәһе лә булып, балаларға тейешле тәрбиә бирешеп, ул өйрәтте мине әсәй булырға. Үҙем бала саҡта хыял иткән антыма тоғро ҡалдым: иптәшем менән икешәр-өсәр эштә эшләһәк-эшләнек, балаларҙы ял йорттарына, донъя гиҙергә ебәреп, әсә наҙын, атай йылыһын биреп, мин кисермәгән ҡыуаныстарҙы күрһәтергә тырыштыҡ. Әсәлек көсө шундай бөйөк, балаһы хаҡына барыһын да булдыра.

**Гәлинур ЮЛАМАНОВ:**

- Әсәйем иҫән булһа ла, балалар йортонда үҫергә тура килде. Бәләкәй саҡта әсәһе менән етәкләшеп барған тиҫтерҙәремә ҡарап, берсә көнләшә, берсә һоҡлана торғайным. Әсәһе янында үҫкән бала - ниндәй генә осраҡта ла иң бәхетле балалыр. Ғаилә ҡорор йәшкә еткәндә лә ошо уйымдан тайшанманым. Өйләнгәндә ҡатынлы булыр өсөн генә түгел, буласаҡ балаларымдың лайыҡлы әсәһе булһын өсөн тормош ҡорҙом. Бөгөн мин ҡатынымды барыһынан бигерәк әсәй булғаны өсөн яратам.

Балалар йорто беҙҙә ныҡлы характер, рухи көс кенә тәрбиәләп ҡалманы, донъя көткәндә кәрәкле хеҙмәттәргә лә өйрәтте. Үҙебеҙ сәсеп, үҫтереп ашаныҡ. Егеттәрҙе төҙөлөш эштәренә, техникаға өйрәттеләр. Ир кешенең төп бурысы -ғаиләне тәьмин итеү, ә атай булырға ҡатыным менән беҙ бергәләп өйрәнәбеҙ. Ғаиләнең бөтөн бәхете ҡатын-ҡыҙҙың, әсә кешенең аҡылына бәйле.

**Денис ХӘМЗИН:**

- Үҙем Өфөлә тыуып, әсәйем ошо ҡалала йәшәһә лә, балалар йортонда үҫтем. Әлбиттә, атай-әсәйем менән йылы өйҙә бергә йәшәге килә ине. Кешеләрҙең йәшәү мәғәнәһен төрлөсә ҡабул итеүен бәләкәй саҡта кем аңлап бөтһөн. Тормошҡа айыҡ ҡарашы булмаған әсәйемә башта үпкәләй инем. Уның миңә ни тиклем ҡәҙерле булыуын, ә үҙе мине, исмаһам, йәлләй ҙә белмәүен аңлатҡым килә ине. Йылдар үтеү менән кәкерене ҡәбер төҙәтеренә, бала бәхетен бер ҡасан да баһалай белмәҫенә, минең йөрәгемде барыбыр аңламаҫына төшөндөм. Етем булһам, шул тиклем рәнйемәҫ тә инем, атайым да, әсәйем дә бар көйө, ташландыҡ бала булыуым күңелемдә төҙәлмәҫ яра ҡалдырҙы. Кемдер бала табыуҙан мәхрүм, кемдер ят баланы тәрбиәләп, үҙенеке келәй ярата - был тормош ғәҙелһеҙ инде. Үҙемдә башҡаларҙан кәм тойоу - характерымда сағыла башланы. Һуңынан мәсеткә барып, мулла менән һөйләшеп ҡайтҡас, донъяға ҡарашым үҙгәрҙе. Түбәнһенгән күңелемдә иман күтәрҙе.

**Светлана НАСЫРОВА.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡатын-ҡыҙҙың бөтә матурлығы, бөтә күрке - әсә булыуҙа. Мең тапҡыр ҡабатлаһаң да, был һүҙҙәр иҫкермәй торған доға кеүек. Нәфис заттың иң гүзәл байрамында балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр хаҡында яҙыуым тиктән түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Әсә тигән бөйөк исемгә барыһы ла лайыҡ түгел шул.**

**...Бәләкәй саҡта 8 Март байрамын ҡаршыларға әҙерләнәм. Кескәй генә ҡулъяулыҡ ситенә "Әсәкәйемә" тигән һүҙ сигеп, сәскәләр ҡайып маташам. Әсәйем өйҙән бер сығып, бер инеп, әллә ниндәй мәшәкәте менән ҡайнай. Ишек асылһа, йәһәт кенә мендәр аҫтына тығып, теге ҡәҙерле әйберемде эй йәшергән булам (Саҡ ҡына тышта йөрөп торһа булмай микән...) Ҡулымдағы аҡ сепрәк киҫәге ер йөҙөндәге иң ҡиммәтле, иң затлы хазина һымаҡ. Шулай булмай ни, үҙем сигеп ултырам даһа. Эргәһенә берәй ҡотлау ҡағыҙы ла ҡыҫтырырға кәрәк, уныһын да мотлаҡ үҙем эшләйәсәкмен. Һатыуҙағы открытка нимә? Уның янында минең рәсем тере булып күренә. Тик бына әсәйемә арнап, ниндәй генә һүҙҙәр яҙайым икән? Донъяла, ер шарында юҡ бит ул мин әйтергә теләгән һүҙҙәр... Күпме ихласлыҡ, ни тиклем яратыу, мөхәббәт йәшәй бала күңелендә. 8 Март көнө балаһынан бүләк ҡабул иткәндә шул тойғоларҙы түкмәй, сайпылтмай ғына аңлаһын ине һәр әсә...**

# Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С

## БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ



### Рионы ышыҡлаусы Христос

Бразилияның баш ҡалаһы Рио-де-Жанейроны дошмандан ҡурсалап, ҡулдарын йәйеп, тау башында торған Христостың таш һыны болоттарға олғашып тора. Был мөһабәт скульптура ҡала янындағы тауға 1 километр самаһы бейеклеккә урынлаштырылған. Бразилдәр Көньяҡ Американың иң матур ҡалаларҙың береһе булған, океан ярындағы Рионы Христос Ҡотҡарыусы ла үҙҙәре кеүек ныҡ ярата тип ышана. 1931 йылдың октябрендә ҡуйылған был монумент ҡаланың символына әүерелә.

Тау башына Христос Ҡотҡарыусыны ҡуйыу тарихы башҡасараҡ башлана. 1921 йылда Бразилия хөкүмәте бойондороҡһоҙлоҡ яулауға 100 йыл тулыуҙы билдәләр алдынан тау башына Америка ҡитғаһын тәүләп асҡан диңгеҙ сәйәхәтсеһе Христофор Колумбҡа һәйкәл ҡуйырға уйлай. Ләкин ил халҡының күбеһе быға ҡаршы сығыу сәбәпле, милләтте берләштереү идеяһын сағылдырған иң яҡшы монументҡа асыҡ конкурс иғлан ителә. Эктор да Силва-Коста исемле ябай эшсе үҙәк гәзиттәрҙең береһенә христиандарҙы




үҙҙәренең аллаһы Христостан башҡа бер кем дә берләштерә алмай, тип мәҡәлә яҙа һәм конкурста еңеп сыға. Христостың гигант монументын Парижда француз скульпторы Поль Ландовский эшләй башлай. Монументтың бейеклеге 40 метрға етә яҙа. Уны Францианан Көньяҡ Америкаға диңгеҙ юлы аша алып киләләр һәм Бразилияла йыш булған бик көслө, өйөрмәле ел-дауылдарға ҡаршы торған бейек тау башындағы был гигант скультураны самолеттарҙағы пассажирҙар әллә ҡайҙан уҡ күреп, Рио-де-Жанейроға етеп килгәнен белә. Туристар һәм ҡала халҡы 220 баҫҡыс буйлап тауға күтәрелеп, тирә-йүнде күҙәтергә ярата.

✓ *Сәс буяуы составындағы водород перекисы сәстәрҙе һыныусан итә, бер үк ваҡытта баш тиреһен дә зарарламай ҡалмай. Парикмахерҙарҙағы экзема һәм астма кеүек профессиональ сирҙәр водород перекисынан да инде.*



ҮӘТ ӘЙ!

# Биҙәнмәй булмай...

**? Биҙәнеү сараларына күпме аҡса тотонаһығыҙ? Шул биҙәнеү сараларының һаулыҡҡа зыян килтереүе хаҡында уйлағанығыҙ бармы?**

**Гөлзәминә СИТДИҠОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:**

- Артист кеше сәхнәгә биҙәнмәйенсә сыға алмай. Элек махсус гримдар ҡуллана инек. Шуға күрә лә беҙ косметикаға ныҡ күнеккәнбеҙ, иртән тороу менән биҙәнергә тотонабыҙ. Гастролдәрҙә йөрөгәндә ҡыйынғараҡ тура килә. Рәхәтләнеп йыуынып, ял итеп булмай. Өйҙә саҡта инде биҙәнмәй йөрөргә тырышам. Йыуынғандан һуң, көҙгөгә ҡарағас, косметиканың йөҙөңә күпме зыян килтереүен күрәһең, әммә сәнғәт матурлыҡты талап итә.

Ғүмер буйы үҙен ҡарап ҡына, һәр саҡ биҙәнеп йөрөгән Рәшиҙә апай Туйсина бер саҡ: "Косметиканы дөрөҫ ҡуллана белһәң, уның бер ҙә зыяны юҡ", - тип әйткәйне. Шуға күрә лә, күберәк мунсаға йөрөргә, төрлө битлектәр эшләргә тырышам. Төрлө фирмаларҙың кремдары менән һөртөнгәндән һуң, үҙебеҙҙең ябай кремдар, көнбағыш, зәйтүн майы менән һөртөнөү яҡшыраҡ тигән һығымтаға килдем. Ә шулай ҙа косметика өсөн айына 1000-1500 һум тирәһе аҡса тотонорға тура килә.

**Римма АМАНГИЛДИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:**

- Беҙҙең йөҙ сәхнәләге сығыштар ваҡытында ла бик арый. Концерттан һуң йөҙҙө таҙартыу, тәрбиәләү өсөн лосьон, кремдарҙы тик аптеканан ғына алам. Ә биҙәнеү әйберҙәрен сит илгә гастролгә сыҡҡанда алып ҡайтырға тырышам. Уларҙың косметик әйберҙәре сифатлы, тәнде арытмай, төрлө аллергия тыуҙырмай. Күп осраҡта, "Lankom" фирмаһының тонлы крем, пудра, помада, ҡәләмдәрен һатып алам. Уларҙы мин тик концерттарҙа, телевидениеға төшкәндә генә ҡулланам, ә көндәлек тормошта бик буянмаҫҡа тырышам.

**Нәзифә ҠАДЫРОВА, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы:**

- Кеше үҙ организмын тойорға, әске кисерештәр менән йөҙ сағылышы бер һулышта йәшәргә тейеш. Мин йөҙөмдөң арығанын һиҙә башлаһам, косметологтарға барам, массаж, битлектәр эшләтәм. Быларҙы эшләтеү өсөн йылына 10 мең тирәһе аҡса китә. Бит өсөн биҙәнеү сараларын "Faberlik", ә помада, ҡәләм, туштарҙы " Oriflame" фирмаһыныҡын алам. Француз хушбыйҙарын һөртәм, дезодоранттарҙың роликлыларын ҡулланам. Мунсала бал, тоҙ һәм сода ҡатнашмаһынан битлек эшләйем, ул битте таҙарта ла, йомшарта ла. Ҡулдарҙы, тырнаҡтарҙы тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүләм. Маникюр эшләтеү өсөн айына 400 һум, ә косметикаға 2 мең тирәһе аҡса китә. Һәр саҡ үҙеңде ҡарап, тәрбиәләп, биҙәнеп йөрөргә кәрәк. Гелән формала булыу, матур йөрөү үҙеңә ышаныс, кәйеф күтәренкелеге бирә. Шуға күрә лә үҙ йөҙөңә ярашлы косметиканы дөрөҫ ҡуллана белергә кәрәк.

**Эльмира ЮЛДАШЕВА, артист:**

- Ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡыт матур булырға, үҙен ҡарап, тәрбиәләп йөрөргә тейеш. Шуға күрә лә биҙәнеү әйберҙәренә аҡса йәлләргә кәрәкмәй, сифатлы косметика менән ҡулланыу фарыз. Макияж өсөн буяныу әйберҙәрен "Oriflame", "Avon" фирмаһыныҡын алам. Бер алғанда 1500-2000 һумға алам да, шул миңә 3-4 айға етә. Көн һайын ҡуллана торған бит, ҡул, тән өсөн кремдарҙы үҙебеҙҙекен һөртәм. Ә бына дезодоранттарҙан аллергия. Сәстәр өсөн ваҡыты-ваҡыты менән ҡара икмәктән туҡландырыу битлектәре эшләйем. Был ҡатнашма сәстәрҙе ҡабартып, ялтыратып ебәрә.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

ИР-АТ НИ ТЕЛӘЙ?

# КҮҢЕЛ МАТУРЛЫҒЫ...

## тыштан да яҡтырта

**Мин ҡатын-ҡыҙҙың биҙәнеүенә ҡаршымын. Быны хәҙер үҙемдең дәлилдәрем менән нигеҙләмәксемен. Бәлки улар беҙҙең гүзәл затты бер аҙ уйландырыр...**



Берҙән, һеҙ косметика өсөн әллә күпме аҡса әрәм итәһегеҙ - был ғаилә бюджетын туҙҙырыу, тигән һүҙ.

Икенсенән, косметика заман ҡатын-ҡыҙҙарын ялған ҡиммәттәргә ышандыра, үҙенә буйһоноусанлыҡ барлыҡҡа килтерә. Йәғни, биҙәнеү, ҡупшыланыу ярҙамында үҙен матур итеп күрһәтергә теләгән ҡыҙ-ҡатында ике йөҙ барлыҡҡа килә: береһе - ысын йөҙө, ул уны физик яҡтан да, психик яҡтан да йәшерергә тырыша, икенсеһе - косметика ярҙамында булдырылғаны, ул уны бар ерҙә күрһәтеп, маһайырға ынтыла. Бындай ҡапма-ҡаршылыҡ гүзәл затҡа ниндәйҙер көсөргәнешлек һәм борсолоу ҙа алып килә: ул үҙ-үҙенә, ысын асылына, ысын йөҙөнә ышанысын юғалта. Икенсе йөҙөнөң яһалмалығы башҡалар алдында фашланмаһын өсөн ул һәр саҡ көсөргәнештә ҡала.

Өсөнсөнән, косметика һәм мода ҡорбанына әйләнгән ҡатын-ҡыҙ өйҙә ире алдында быҫраҡ һәм туҙған халат менән йөрөй алғанда ла, урамға икенсе - һыланған, һыйпанған, яһалма йөҙөн алып сығырға тейеш. Биҙәнеп, яҡшыраҡ кейенеп, ул үҙ ире йәки һөйгәне алдында ғына түгел, өйҙән ситтә лә иғтибар үҙәгендә булыуға дәғүә итә. Былар ғаиләлә төрлө низағтарға юл аса ла инде.

Радио, телевидение, матбуғат саралары рекламаһы һәм иғландары косметика сәнәғәте продукцияһын икмәк һәм һыуға ҡарағанда ла юғарыраҡ ҡуйып маҡтап, ҡыҙ-ҡатындарҙың мейеһен яулап ала, уларҙа макияжға һәм модаға ихтыяж барлыҡҡа килтерә. Етмәһә, был осраҡта ҡыҙ-ҡатынды ниндәй генә "ағзаларға" бүлеп бөтмәй ул рекламалар: йәшенә ҡарата - бер төрлө косметика, миҙгелгә ҡарата - икенсе, кисен иһә - өсөнсө, иртән - дүртенсе... Шулай итеп, башҡа кешеләр уның өсөн барыһын да хәл итә: нимә килешә, ниндәй төҫ уның йөҙөнә тап килә. Ҡатын-ҡыҙ үҙе лә һиҙмәҫтән косметика тотҡонона әүерелә.

Йәмғиәт аҡрынлап матурлыҡ ориентирҙарын да онотоп бара һымаҡ тойола миңә. Йәғни беҙ хәҙер кешенең ысын матурлығы - ул тышҡы йөҙ йә һын-килбәт түгел, ә рухи матурлыҡ, күркәм холоҡ икәнлеге тураһында телгә лә алмай башланыҡ. Ә бит Хоҙай нисек ятатһа, кешегә шулай булыу кәрәк. Берәү ҙә икенсеһен ҙур танауы йә ҡыҫыҡ күҙҙәре өсөн ғәйепләй алмай. Ә шулай ҙа беҙҙең көндәрҙә күңеле насар булһа ла тәне матурҙарҙы һанлау ғәҙәте өҫтөнлөк итә бара. Шул арҡала ҡатын-ҡыҙ тәбиғи булмаған ғәҙәттәрҙе үҙләштерә, матур төргәккә төрөлгән боҙоҡ тауарға оҡшай бара...

Унан һуң, быныһы иң мөһиме, косметика һаулыҡ өсөн дә зарарлы бит. Косметика сәнәғәте үҫешеп, уларҙың тауарын файҙаланыусылар артыу менән үк аллергия һәм башҡа тире ауырыуҙары ла иң йыш ҡуйыла торған диагнозға әүерелде. Шуға ла XX быуат медицина әҙәбиәтендә "аллергия быуаты" тип йөрөтөлә.

Косметика һөҙөмтәһендә тыуған сирҙәр тире аллергияһы менән генә сикләнмәй. Ағыуланыу һәм һуҡырайыу, тире яман шеше, төрлө системалар эшмәкәрлеге боҙолоу - исемлекте әллә күпмегә һуҙырға мөмкин. Элегерәк ҡыҙ-ҡатындар керпек һәм ҡаштарын буяу өсөн "лаш лур" тигән буяу ҡуллана торғайны. Был буяу составындағы парафинлы диамин күптәрҙе һуҡырайыуға килтерҙе. Шунан был буяуҙы етештермәй башланылар. Ләкин парафинлы диаминға оҡшаш икенсе матдәләр сәс буяуҙары етештереү өсөн файҙаланыла. Бындай буяуҙар күҙҙәргә, тиреләге яраларға эләкһә, шулай уҡ күңелһеҙ эҙемтәләргә килтерә. Сәс буяуы составындағы водород перекисы сәстәрҙе һыныусан итә, бер үк ваҡытта баш тиреһен дә зарарламай ҡалмай. Парикмахерҙарҙағы экзема һәм астма кеүек профессиональ сирҙәр водород перекисынан да инде.

Билдәле булыуынса, тирләү кеше тәненең тәбиғи һаҡлауҙы һәм термокөйләүсе сараһы булып тора. Был система эшмәкәрлеге боҙолоу, йәғни тирләү биҙҙәренең зыян күреүе ул һейҙек ҡыуҙырыусы системаның боҙолоуы менән бер. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр дезодорант ҡулланғанда тир биҙҙәренә зыян килтереүе тураһында белмәй. Дезодорант составындағы алюминий тоҙҙары протеин молекулаларын бәйләүсе водород атомына тәьҫир итә һәм протеиндарҙың тиреләә тотҡарланыуына, тир биҙҙәрен ҡаплауға килтерә. Емерелгән протеин өлөшсәләре бер үк ваҡытта тирене лә ҡыҙарта.

Шыйыҡ косметика менән ағыуланыу осраҡтары ғәҙәти күренеш. Мәҫәлән, тырнаҡ лактарының невралгия тыуҙырыуы иҫбат ителгән. Лакты ҡуйыртыусы толуол матдәһе невралгияға сәбәпсе була, бер үк ваҡытта бөйөрҙәрҙе зарарлай. Тырнаҡты лактан таҙартыусы ацетон да, тырнаҡтың һыныусанлығын иҫкәртеүсе шыйыҡса ла зарарлы.

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, косметика сараларының ҡайһы берҙәре ваҡытлыса ауырыу тыуҙыра, ҡайһы берҙәре хроник сирҙәр бүләк итә. Ул ауырыуҙарҙың ҡайһы берҙәре бик тиҙ асыҡлана, ҡайһы берҙәре йәшерен рәүештә оҙаҡ йылдарға һуҙыла.

**Шулай итеп...**

**Юҡ, мин ҡатын-ҡыҙҙың үҙ-үҙен ҡарауына, көҙгө алдында күп әйләнгеләүенә, матурлыҡҡа ынтылыуына ҡаршы түгелмен. Тик... Физик һәм рухи гигиена ҡағиҙәләрен үтәһәң, шул еткән. Күңел матурлығың тыштан да нурландырасаҡ.**

**Ҡасим СӘЛИХОВ.**

# УҢҒАН ҠАТЫН...

## ҡар өҫтөндә лә усаҡ яға

**? Ҡатын-ҡыҙ һәм етәксе. Һеҙ ошо ике яуаплы вазифаны нисек итеп уңышлы яраштыра алаһығыҙ?**

**Гүзәл ЯУБАҪАРОВА, "Артстудия "Проект" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры:**

- Кешене кеше иткән - эш. Хоҡуҡтары буйынса ҡатын-ҡыҙ ир-егеттән бер яғы менән дә кәм түгел. Ҡатын-ҡыҙ ҡайҙа ғына эшләмәһен, эшен һәр ваҡыт еренә еткереп үтәй: кешене тыңлай, аңлай, ваҡытында йәлләй ҙә белә. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, эштә ҡатын-ҡыҙҙың етәксе булыуы тағы ла яҡшыраҡ. Үҙем иһә хеҙмәткәрҙәремдән эш талап итәм, ләкин һис ҡасан тауыш күтәрмәйем, әрләмәйем, тейешенсә аңлатырға, уларҙы аңларға тырышам. Башкөллө эшкә сумғанда ла ғаиләм айырым дәүләт була алмай. Кисен ғаилә менән бергәләп йыйылғанда, һөйләшеп туя алмайбыҙ, проблемалар булһа, уртаға һалып хәл итәбеҙ. Эштә етәксе булһам да, мине бала саҡтан шуға өйрәттеләр: ир - ғаиләлә баш, хужа булырға тейеш.



Өйҙә ирем хужа - аштың иң тәмлеһе уға, үҙем дә, балалар ҙа ярҙам һорап, иң тәүҙә аталарына өндәшәбеҙ. Ул минең беренсе ярҙамсым, төп таянысым. Бер-береңә ихтирам булып, ғаиләлә ир-егет үҙ урынын, ҡатын-ҡыҙ үҙ урынын белһә, барыһы ла яҡшы була. Ғаилә тормошон мин гөл менән сағыштырам: гөл ултыртҡас, уны ҡарап, һыу һибеп, тәрбиәләп торорға кәрәк, ғаилә мөнәсәбәттәрендә лә бер-береңде аңлап, сабырлыҡ һаҡлап, ғаилә нигеҙен ҡаҡшатмай һаҡлаһаң, ул да ныҡлы була. Башҡортостандың бөтә гүзәл заттарын етеп килгән байрам менән ҡотлап, ғаилә бәхете, уңыштар теләйем.



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Тәбиғәттә ир менән ҡатын бер ваҡытта ла тиң хоҡуҡлы була алмай. Йәшәү рәүешенең иң камил юлын күрһәтеүсе буларак, Ислам дине ғаиләлә ир менән ҡатындың бурыстарын айырып ҡарай. Бәхетле ғаилә усағы янында бер юлы ике башлыҡ булыуы мөмкин түгел. Тап шуны иҫәпкә алып, Ислам дине ир менән ҡатындың тәбиғәтенә ярашлы бурыстарҙы билдәләй. Әгәр ҙә һәр икеһе лә үҙенә тәғәйенләнгән бурысты теүәл үтәһә, ғаилә камил һәм бәхетле була. Шәриғәт ҡанундары менән риза булмағандар, ашыҡмайынса, иң тәүҙә уның асылына төшөнөргә тейеш.**

# ИРЛЕ ҠАТЫНДЫҢ БУРЫСТАРЫ,

## йәки Ғаилә усағы янында ике башлыҡ булмай



Ирҙе хөрмәт итеү түбәндәгеләрҙән ғибәрәт:

✷ **Иренең рөхсәтенән тыш, ҡатын өйҙән сығырға тейеш түгел.** Хатта туғандарының хәлен белеү өсөн дә ул рөхсәт алырға тейеш. Бер хәҙистә әйтелгәнсә: "Аллаһы Тәғәләгә ышанған ҡатын иренең рөхсәтенән тыш өйҙән сығырға тейеш түгел". Ир кеше үҙ нәүбәтендә мәрхәмәтле булырға һәм ҡатынына ҡаты бәрелмәҫкә тейеш.

Ошо турала бер хәҙистә былай тиелә. Оҙайлы сәйәхәткә сыҡҡанда ире ҡатынына үҙе ҡайтҡанса өйҙән сыҡмаҫҡа ҡушҡан. Ошо мәл ҡатындың атаһы ауырып китә. Иренең һүҙен йығырға баҙнат итмәгән ҡатын, өйөнән сығырға рөхсәт һорап, бер кешене Мөхәммәт бәйғәмбәргә ебәрә. "Иренең рөхсәтенән тыш ҡатын өйҙән сығып йөрөй алмай", - тип яуап бирә Бәйғәмбәр. Ҡатын иренең һүҙен йыҡмай һәм, хатта атаһы үлһә лә, өйҙән сыҡмай. Бәйғәмбәр ҡатынға шатлыҡлы хәбәр ебәрә: "Иреңдең һүҙен йыҡмағаның өсөн Аллаһы Тәғәлә атайыңдың барлыҡ гонаһтарын ярлыҡаны".

✷ **Ҡатын кеше иренең бәләкәй генә уңыштарына ла ҡыуана һәм һоҡлана белергә тейеш.** Ошо хаҡта бер хәҙистә былай тиелә. Бәйғәмбәр тамуҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙың күп булыуын күргән. "О, Аллаһы Тәғәләнең рәсүле, ни өсөн тамуҡта ҡатын-ҡыҙҙар күберәк?" - тип һорағандар Унан. "Сөнки улар ирҙәренең уңыштарын күрмәмешкә һалышҡан", - тип яуап биргән Бәйғәмбәр.

✷ **Ире яҡынлыҡ ҡылырға саҡырғанда, ҡатын бер ваҡытта ла баш тартырға тейеш түгел.** "Әгәр ире теләп тә, ҡатыны баш тартһа, һәм ире ҡәнәғәтһеҙлек менән йоҡлап китһә, ул ҡатынды фәрештәләр төнө буйы ҡәһәрләп сыға", - тиелә бер хәҙистә. Әммә күрем ваҡытында яҡынлыҡ ҡылыу тыйыла. Был ҡағиҙәне боҙған ир ҙур гонаһ ҡыла.

✷ **Ҡатын-ҡыҙ әҙ һүҙле булырға һәм ир күңелен ҡыйырҙай һүҙҙәр һөйләмәҫкә тейеш.** Был турала хәҙистә былай тиелә: "Фани донъяла ҡатын ирен рәнйетһә, гүрҙән тауыш ишетелер: "Алланың ҡәһәр һуҡҡыры, ирең бит һинең менән ваҡытлыса ғына йәшәй, һинән китеп, ул бында киләсәк".

✷ **Әгәр ҡатын ирен асыуландырһа, йөрәгенә үтеп инерҙәй һүҙҙәр менән рәнйетһә, ул ғәфү үтенергә тейеш.** "Әгәр ире ҡатынына асыуланһа, Аллаһы Тәғәлә ул ҡатындың доғаларын ҡабул итмәҫ, яҡшы эштәре лә бойомға ашмаҫ. Әммә ире Шәриғәт ҡушҡандан тыш ҡыланһа, ҡатынының гонаһтары ярлыҡаныр", - тиелә хәҙистә.

✷ **Иренең рөхсәтенән тыш, ҡатыны башҡаларға бер нәмә лә бирә алмай.** Әммә ире быға ҡаршы булмаҫына ышанғанда, ҡатыны мәсьәләне үҙ белдеге менән хәл итә ала.

✷ **Ире эргәһендә булып, яҡынлыҡ ҡылырға теләк белдерһә, ҡатыны өҫтәлмә рәүештә ураҙа тота алмай.** Иренең теләгенә ҡаршы барып тотҡан өҫтәлмә ураҙаның сауабы булмаясаҡ. Әммә был тыйыу мәжбүри ураҙаға ҡағылмай.

✷ **Ирле ҡатынға үҙен сит күҙҙәрҙән һаҡлай белеү мөһим.** Бер мәл Бәйғәмбәр ҡыҙы Фатиманан: "Ҡыҙ-ҡатын өсөн иң мөһиме нимә?" - тип һораған. "Минең өсөн иң мөһиме - башҡаларҙың мине күрмәүе һәм мин дә уларҙы күрмәүем", - тип яуап биргән ҡыҙы. Бәйғәмбәр ҡыҙын ҡосағына алған да, уның зирәклегенә һоҡланыуын белдергән. Әммә был уҡыған ваҡытта, йәки эштә, йәки табибҡа барғанда берберенде күрмәү тигәнде аңлатмай. Шәриғәттең әхлаҡи ҡанундарынан ситләшмәгәндә, гонаһ ҡылынмай.

✷ **Кейем алғанда, йәки йорт йыһаздары һайлағанда, ҡатын иренән саманан артығын талап итмәҫкә тейеш.** "Ахырызаман еткәндә әҙәм ҡатыны һәм балалары арҡылы зыян күрәсәк һәм үҙ асылын юғалтасаҡ. Үҙ мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйып, ҡатындары артығын талап итәсәк һәм ирҙәрҙең фани донъялағы холҡон үҙгәртәсәк", - тиелә хәдистә.

✷ **Ире харам юл менән тапҡан ризыҡтан ҡатыны баш тартырға тейеш.** Урланған, тартып алынған ризыҡ, иҫерткес эсемлектәр һатыуҙан алынған килем, бурысҡа биреп, уның процентын арттырып алған аҡса, ришүәт һәм башҡа боҙоҡлоҡтар юлы менән табылған ризыҡ харам һанала. Харам ризыҡты аслыҡтан үлеү ҡурҡынысы янағанда ғына ҡулланырға мөмкин. Элек ирҙәре ситкә эш эҙләп киткән ваҡытта ҡатындары уларҙың хәрәм ризыҡ менән ҡайтмауҙарын үтенгән. Тамуҡ утында яныуға ҡарағанда, аслы-туҡлы йәшәүҙе улар күпкә өҫтөн күргән.

✷ **Әгәр ҙә ире тыйылған ғәмәлдәр талап итмәһә, ҡатыны уны һәр ваҡытта ла тыңларға тейеш.** "Ҡатын-ҡыҙ биш намаҙын ҡалдырмаһа, рамаҙан айында ураҙа тотһа, ирен тыңлаһа, ул ожмахҡа эләгәсәк", - тиелә хәҙистә.

✷ **Ирле ҡатын иренең кәйефен күтәрә белергә тейеш.** "Ирен ҡәнәғәтләндергән ҡатындың урыны ожмахта", - тиелә.

* Мөһим эштәрҙән тыш, ирле ҡатын күрше-күләне менән гәп һатырға, ваҡытын бушҡа әрәм итергә тейеш түгел.

* Өйҙә лә, ситтә лә ҡатын иренең намыҫын һаҡларға, уға булышлыҡ итергә тейеш.

* Ҡатындың иренә тәне менән дә, башҡа төрлө лә хыянат ҡылырға хаҡы юҡ.

* Иренең рөхсәте менән халыҡ араһына сыҡҡанда ҡатын кеше үҙен ипле торға, ябай кейемдә булырға һәм сит күҙҙәргә артыҡ салынмаҫҡа тейеш.

* Ҡатын һөйләшкәндә тауыш күтәрмәҫкә тейеш. Иренең дуҫтары менән осрашҡанда улар менән танышырға һәм дуҫлашырға уның хаҡы юҡ. Ире өйҙә юҡта дуҫтары килһә, ҡатын улар менән ишек аша ғына һөйләшә ала.

* Ҡатын үҙ ата-әсәһенә ҡарағанда, ирен күберәк хөрмәт итергә тейеш.

* Ҡатын һәр ваҡыт таҙа, бөхтә кейенергә һәм иренең теләктәрен үтәргә әҙер булырға тейеш. Быны ул күҙ ҡарашы, иркә һүҙҙәр менән белдерә.

*Ҡатын балаларына һәм иренә тауыш күтәрмәҫкә, ғауға ҡуптармаҫҡа, ирен кәмһетеп, үҙенең сибәрлегенә баҫым яһамаҫҡа тейеш.

* Ире хаҡлы булмаған хәлдә лә ҡатыны ғауға ҡуптармайынса ғына Аллаһы Тәғәләнән уның дөрөҫ юлға баҫыуын һорарға тейеш.

* Тол ҡалған ҡатын дүрт ай ҙа ун көн дауамында ҡайғы хәлендә булырға тейеш.

**Әгәрҙә ирле ҡатын ошо әхлаҡи ҡанундарҙы теүәл үтәһә, ул бәхетле була. Фани донъяла ауырлыҡтар кисергән хәлдә лә, тәрбиәле, тәртипле ҡатын Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ышанып йәшәй. Аҡыллы ҡыҙ-ҡатын кемгә кейәүгә сығырын алдан уҡ һиҙемләй белә.**

ҒӘФҮ ИТ...

**Һинең йәшкелт- һоро күҙҙәреңә төбәлеп, их, ғәфү үтенергә лә, ҡырт боролоп, башты һуҡкан яҡҡа атлап китергә ине, атай, тип уйлайым мин ҡайһы саҡ. Әсе күҙ йәштәремде йәшерер, һиңә ҡарата булған хистәремә йылдар юшҡыны ултырмағанын күрһәтмәҫ өсөн... Ҡайһылай ҙа еңел булыр ине беҙгә, эйеме, атай?**

# Мин дә ғорур,

## тимәк,икебеҙ ҙә ғәйепле

Иҫләйһеңме икән һин мине? Иҫләһәң, кескәй генә ҡыҙсыҡ итеп күҙ алдыңа килтерәһеңдер әле. Мин үҫтем, атай. Үҫтем һәм һиңә булған бөтә үпкәләремде әллә йоттом, әллә оноттом. Мин һине күптән, бик күптән ғәфү иттем. Сөнки шул ҡәҙәр оло рәнйеште йөрәккә йомоп йәшәүҙән тонсоға, быуыла башлағайным.

Ниңә һин киттең беҙҙән, атай? Әсәйемдән китеүеңде аңлаһам да, минән йыраҡлашыуыңды аңлай ҙа, рухым менән ҡабул итә лә алманым. Мин кемгә "атай" тип өндәшергә тейеш инем һуң?

Иҫемдә, етенсе класта уҡығанда үҙемдән буйға ла, арҡырыға ла ҙурыраҡ бер малайҙы туҡманым. "Һинең атайың да юҡ бит әле!"-тип йөҙөмдән алғаны өсөн. Иртәгәһенә мине директор бүлмәһенә саҡыртып йөҙәттеләр. Малайҙың атаһы мине ҡурҡытырға теләп, өҫтәл төйөп ярһыны, ә әсәйем ҡылған ҡылығымдан быуынһыҙ булды ла ҡуйҙы. Өйгә ҡайтҡас та берәүгә лә ниңә ул малайҙы туҡмағанлығымды әйтмәнем. Әсәйемдең күңелен уйланым, ахыры. Икенсенән, малайҙың һүҙҙәре ныҡ ҡына ғәрләндергәйне, үҙемә ни тиклем ҡыйын икәнлеген күреп ҡалырҙар, илап ҡуйырмын, тип ҡурҡтым.

Иртәгәһенә класс алдында теге малайҙан ғәфү үтендерҙеләр. Мине түбәнһетеүенә ифрат ҡыуанған егет ишараты телен күрһәтеп, йәнә: "Атайһыҙ!"-тип шыбырланы.

-Үҙеңдең балаларың атайһыҙ үҫһә ине...

Ул һүҙҙәрҙе әйтер өсөн күпме нәфрәт һыйҙы икән минең йөрәгемә? Шундай йән өшөткөс һүҙҙәрҙе нисек ҡурҡмай әйтә алдым икән, башыма һыймай. Ҡыҙғаныс, әлбиттә, ул егеттең ғаилә бәхете булманы: үҙенең башы төрмәнән сыҡмай, ҡатыны ике балаһын ситтәр ҡулына тапшырып, хәҙер ҡайҙалыр сығып китте. Минең рәнйешем төштө, тип уйлай күрмә тағы. Ғүмер баҡый кеше арҡаһына ышыҡланыу шәхесте юҡҡа сығара, тормош һынауҙарын үтеүгә яраҡһыҙ итә. Ә ул егет атаһына маһайып, тап шулай булып үҫте.

Ни өсөн был хәлде яҙаһың ул һин, тип аптырайһыңдыр әле, атай. Мин бары тик үҙемдең ниңә һиңә ҡарата таш бәғергә әйләнгәнлегемде аңлатҡым килә. Байтаҡ ваҡыт һинән үс алырға теләү тойғоһо миңә йәшәргә- һинһеҙ йәшәргә - ярҙам итте. Һуңынан яҙмышыма төшкән һәр бер ҡыйынлыҡтың сәбәбен һинән күрҙем. Һуңынан, тағы ла күберәк йылдар беҙҙең араға яткас, һине өҙөлөп һағына, төштәремдә күрә башланым. Ниңә икән, атай?

Ә бер көн килеп һинең ҡатының миңә шылтыратты. Атайың ауыр хәлдә, уны килеп күр, тип ялынды. Ул көтә һине, тине. Ҡыҙыҡ. Быға тиклем мин һине көтә инемсе... Барманым. Йөрәгемдән ҡан һауһа ла, барманым. Уның ҡарауы, һаман да шул мәлдәрҙе төшөмдә күреп, баҫлығып уянам.

Кисерәһеңме мине, атай? Ҡаты бәғерлелегемдә һин дә ғәйепле бит. Мин бары тик үҙемсә йәшәргә тырыштым. Өйрәтеүсеһе булмаған, күрәһең. Йомшаҡ күңелле, бар булмышынан наҙ ипкене килеп торған әсәйем туңған йөрәгемде иретә алманы ла ҡуйҙы. Ә мин көслө булырға, кәрәк икән, үҙемде лә, ике ҡустымды ла, әсәйемде лә яҡларға тейеш инем.

Минең рәсемемде түш кеҫәңдә йөрөтәһең, тиҙәр. Ҡағыҙ киҫәген йөрәгеңә ҡыҫҡансы, күҙҙәремә тултырып ҡарап, ҡыҙым тип өндәшһәң ине. Ғорурһыңмы? Ниндәй ғорурлыҡ хаҡында һүҙ булыуы мөмкин, атай, әгәр үҙ балаңды яратыр өсөн үҙ-үҙеңде еңә алмағас.

Ә мине һиңә оҡшаған, тиҙәр. Тимәк, шундай уҡ ғорур, ҡырыҫ, тиҫкәре. Тимәк, мин дә беренсе булып араларҙы яҡынайтыуға ыңғайламам. Тимәк, беҙ икебеҙ ҙә ғәйепле.

**Шуға күрә лә гәзит биттәренән булһа ла, исемемде йәшереп, һинән ғәфү үтенәм. Һине яратып та, һағынып та, шул хистәрҙе белгертергә тартынғаным, һине генә түгел, исемеңде лә хәтеремдән сығарып ташларға теләгәнем өсөн кисер, атай. Ғәфү ит.**

**Ләйлә САБИТОВА.**

✓*Рәсәй мәғлүмәттәре буйынса, беҙҙең илдә репродуктив йәштәге 20 миллион ир-егет бар. Ә репродуктив йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һаны яҡынса 25 миллион тәшкил итә.*



**Беҙ ирҙәрҙе - көслө, ҡыҙ-ҡатындарҙы көсһөҙ зат тип атап йөрөтәбеҙ. Тәбиғәт шулай яратҡан уларҙы. Әммә... Заман тигәнең енестәрҙең ошо тәбиғи сифаттарына зыян килтерә, үҙгәрештәр индерә икәнен шәйләмәй ҙә ҡалғанбыҙ икән. Уның эҙемтәләрен күреп, сәбәптәрен барлай башлағайныҡ... "Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" тигәнде оран итеп күтәрер хәлгә еткәнбеҙ икән дә. Гәзитебеҙҙең 7-се һанында БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, медицина фәндәре докторы Венер Ғәзиз улы Сәхәүетдинов был проблемаға бер аҙ байҡау яһағайны. Һөйләшеүҙе Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың тағы бер депутаты, Башҡортостан Ҡатын-ҡыҙҙар берлеге рәйесе Рәшиҙә Искәндәр ҡыҙы СОЛТАНОВА менән дауам итәбеҙ.**

# ИРҘӘРҘЕ ҺАҠЛАЙЫҠ!

## Был оранды ҡатын-ҡыҙҙар яҡлай



### Улар өсөн беҙ ҙә яуаплы

"Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" тигән лозунг урам саттарына уҡ яҙылып ҡуйылмаһа ла, ул хәҙер врачтарҙың да, ил яҙмышы өсөн көйгән сәйәсәтселәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да теленән төшмәй. Аныҡлайыҡ: кемдән һәм низән һаҡларға һуң ирҙәрҙе?

Тәүҙән үк шуны билдәләп үтер инем: ир-егеттәребеҙ менән килеп тыуған хәлгә беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, битараф ҡала алмайбыҙ. Беҙ - әсәләр, уларҙы ла беҙ тыуҙырабыҙ, беҙ тәрбиәләйбеҙ, тимәк, Аллаһы Тәғәлә алдында улар өсөн беҙ ҙә яуаплыбыҙ. Ҡатын-ҡыҙ кеше генә түгел, ул кешенән юғарыраҡ торған йән эйәһе, ул - тәбиғәт. Шуның өсөн көслө заттарҙың яман ҡылыҡтары, шул арҡала күпләп үлеүе, сәләмәтлеге ҡаҡшауы, көндән-көн һәләкәткә барыуы беҙҙе лә борсой.

Беҙ хәҙер республикала ғына түгел, ә бөтөн Рәсәйҙә хөкүмәт кимәлендә демографияны һауыҡтырыу хәстәрлеген алға һөрәбеҙ. Әммә демографияны һауыҡтырыу - ул яңы тыуған балалар һанын арттырыу ғына түгел бит. Тыуған балалар сәләмәт һәм ғүмерле булырға тейеш. Ауырыу атайҙар менән сәләмәт балалар тыуҙырып, демографияны һауыҡтырып буламы? Юҡ, әлбиттә. Етмәһә, ауырыу атайҙарҙан бигерәк тә ауырыу ир-балалар тыуыуы ҡағиҙәгә әйләнеп бара. Бала табыу йортонда бер малай һәм бер ҡыҙ бер төрлө сир менән тыуа икән, малай донъя ҡуйырға, ә ҡыҙыҡай йәшәп китергә мөмкин. Сөнки генетик яҡтан ҡыҙҙарҙың йәшәү һәләтлеге юғарыраҡ, ә малайҙарҙың ҡаҡшаған була. Ир балалар инфекцион сирҙәргә лә тиҙ бирешеүсән, сөнки иммунитеттары бик түбән була. Бөгөнгө йәш ғаиләләрҙең 15 процентына балаһыҙлыҡ проблемаһы хас. Элек бындай осраҡта гел генә ҡатын-ҡыҙҙы ғәйепләй торғайнылар. Хәҙер, киреһенсә, балаһыҙлыҡта түлһеҙ һәм кәрһеҙ ирҙәр ғәйепле булып сыға.

### Биш ҡатынға - бер ир

Рәсәй мәғлүмәттәре буйынса, беҙҙең илдә репродуктив йәштәге 20 миллион ир-егет бар. Ә репродуктив йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һаны яҡынса 25 миллион тәшкил итә. Статистика буйынса, тимәк, 1 иргә 1,25 ҡатын-ҡыҙ тура килә. Шулай ғына булһа, ярай ине әле. Хәл күпкә яманыраҡ шул. Ҡарағыҙ: ул 20 миллион ирҙең күпмеһелер - наркоман, күпмеһелер - иректән мәхрүм ителгән, күпмеһелер - эскесе, күпмеһелер - импотент. Был исемлеккә стандарт булмаған йүнәлешлеләр инмәгән әле - уларының да бит балалары булмай. Ул ирҙәрҙең күпмеһелер эшһеҙ икәнен дә онотмайыҡ. Эшһеҙ ир нисек итеп ғаилә тураһында ҡайғырта ала? Ошоларҙан һуң ирҙәрҙең күпмеһе генә исеменә һәм есеменә яуап биргәндәр исемлегендә тороп ҡала һуң? Тимәк, исемлектә ҡалған бер һау иргә 4-5 ҡатын тура килә. Пессимистик күҙәтеүҙәр буйынса, 100 йылдан һуң Рәсәй берәҙәк, хәйерсе, яңғыҙаҡ әбейҙәр менән тулы илгә әйләнәсәк.

### Яуапһыҙлыҡ сәбәпсе

Ирҙәр үҙ һаулығына үтә яуапһыҙ ҡарай - бөтөн бәлә ошонда ла инде. Ғәҙәттә, ир-егеттәр, бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәр, ғүмерендә бер тапҡыр - армияға саҡырылғанда ғына тулыһынса медицина тикшереүе үтә. Улар хатта теш дауалатыу тигәнде лә белмәй һәм шунлыҡтан ҡартайып өлгөрмәҫ элек үк тешһеҙ ҡала. Ә бит тештәрҙең сәләмәтлеге эске ағзаларҙың да сәләмәтлеген тәьмин итә.

Күп ир-егет армиянан да ауырыу булып ҡайта. Армиялағы бөгөнгө сәләмәт булмаған әхләҡи-психологик мөхит, тәртипһеҙлек, дөрөҫ туҡланмау, биоөҫтәмәле аҙыҡтар ашау һәм башҡа сәбәптәр егеттәребеҙҙең сәләмәтлеген нигеҙенән ҡаҡшата. Шуға ла армиянан ҡайтҡан күп егеттәр, бигерәк тә ауылдарҙа, ғаилә ҡороуҙан ҡурҡып, яңғыҙ йәшәүҙе хуп күрә, эскелеккә башкөллө сумып, былай ҙа шәптән булмаған сәләмәтлеген артабан ҡаҡшатыуҙы дауам итә.

Ирҙәрҙең импотентлығын эскелеккә лә япһаралар. Ә врач-наркологтар фаразлауынса, эскән ирҙәрҙең ике генә инстинкты ҡала: ашау һәм енси теләк. Тимәк, ирҙәрҙең түлһеҙлеге һәм кәрһеҙлеге эсеүҙән генә түгел, киреһенсә, улар тап ошо бәләләре арҡаһында эскегә һабыша. Йәғни проблемалы ирҙәрҙең һәр береһе үҙ алдына шым ғына илай.

Ҡатын-ҡыҙ түлһеҙлек йәки башҡа бәләләре менән врач-гинекологҡа бара ала, ә ирҙәрҙең бындай врачы юҡ. Ул бит үҙ ҡайғыһын һөйләү өсөн участка врачына бара алмай. Хеҙмәте өсөн әллә күпме аҡса һораусы сексопатологҡа ла бик мөрәжәғәт итә һалып бармай улар. Теш дауалатырға ҡурҡҡан ир-атты импотенция мәсьәләһе менән дауаханаға барырға мәжбүр итеп ҡара әле! Ғәҙәттә, эскән ирҙәр ҙә үҙҙәрен алкоголик итеп танымай бит. Бында ла шулай килеп сығыуы бар. Әгәр ошо проблемаларҙы бөгөндән хәл итмәһәк, йәғни ирҙәр үҙ проблемалары менән мөрәжәғәт итә алырҙай андрологтар, башҡа белгестәр әҙерләмәһәк, уларҙың сәләмәтлеген һаҡларҙай медицина, социаль хеҙмәттәр булдырмаһаҡ, беҙҙең киләсәк хәүефле.

### Кемгә кейәүгә сығырға?

Халыҡ иҫәбен алыу буйынса һуңғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда Рәсәйҙәге һәр икенсе ҡатын-ҡыҙ - яңғыҙаҡ. 1 мең ҡатын-ҡыҙҙың 175-е бер ҡасан да кейәүҙә булмаған, 130-ы - тол ҡатындар, күпмеһеләр айырылышҡан, һәм башҡалар. Бына ни өсөн нәфис зат вәкилдәре сит илгә сығыу, унда ғаилә ҡороу яғын ҡарай башланы. Был да шәп түгел. Теләйбеҙме-юҡмы, берәй заман алдыбыҙға күп ҡатынлылыҡ мәсьәләһе килеп баҫырға ла мөмкин әле.

### Һыра һеҙгә төҫ түгел

Әлегә матбуғат саралары ла, медицина ла ирҙәр бәләһе тураһында саң ҡаҡмай. Ҡалабыҙҙың дүрт юғары уҡыу йорто урынлашҡан "Ҡунаҡһарай" йорто эргәһендә һыра түгел, ә ҡымыҙ, сәй һатыу яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән?

Һыра тураһында айырым әйтергә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һыра составында ҡатын-ҡыҙҙар гормоны өҫтөнлөк итә икән. Һыраны күп ҡулланған ир-егеттәрҙә, шулай итеп, ирҙәр башланғысы юйыла һәм ҡатын-ҡыҙҙар гормоны арта бара. Икенсенән, йөрәкҡан тамырҙары сиренә килтереүсе кобальт, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарына дусар итеүсе ингредиент та бар икән был эсемлектә. Ә бөгөн иһә Рәсәйҙә һәр кешегә уртаса 14 декалитр спирт тура килә.

### Һуғыш... ғаиләлә бара

Чечнялағы һуғыш йылдарында барлығы 8 мең кеше үлһә, Рәсәй ғаиләләрендә йыл һайын ирҙәре ҡулынан 14-17 мең ҡатын, ҡатындары ҡулынан - 4 мең ир, ата-әсәһе ҡулынан 2,5 мең бала һәләк була. Илдәге суицид осраҡтарының 90 проценты ирҙәргә тура килә.

Академик Павлов әйткәнсә, кеше ғүмере оҙайлығы - 160 йәш. Хәҙер был күрһәткесте 120 тиҙәр. Ғәмәлдә иһә, кешеләр, бигерәк тә ирҙәр, был ғүмерҙең яртыһын да йәшәй алмай. Бына ошо проблемалар төйөнөн, ниһайәт, сисер ваҡыт етте.

Ысын ир-егеттәрҙе ирҙәр тәрбиәләргә тейеш. Әммә бөгөн тәрбиә мәсьәләһе ғаиләлә лә, балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә ҡатын-ҡыҙ иңенә йөкмәтелгән. Ир бала тәрбиәләү, ир тәрбиәләү, атайҙар тәрбиәләү программаһы һәм мәктәбе юҡ. Атайлыҡ статусын күтәрергә, малайҙарыбыҙҙы һәм егеттәребеҙҙе атай булырға өйрәтергә кәрәк беҙгә. Беҙҙә гражданин, патриот булырға өйрәтәләр. Әммә кеше иң тәүҙә үҙ ғаиләһендә, үҙ ырыуында патриот булырға тейеш. Рәсәйҙең милли идеяһы нимә, тип баш вата һаман да сәйәсмәндәр. Ул ирҙәрҙе һаҡлауға, ир балаларҙы тәрбиәләүгә ҡайтып ҡалырға тейеш.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**яҙып алды.**

*"Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" тигән лозунг урам саттарына уҡ яҙылып ҡуйылмаһа ла, ул хәҙер врачтарҙың да, ил яҙмышы өсөн көйгән сәйәсәтселәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да теленән төшмәй. Аныҡлайыҡ: кемдән һәм низән һаҡларға һуң ирҙәрҙе?*

*Тәүҙән үк шуны билдәләп үтер инем: ир-егеттәребеҙ менән килеп тыуған хәлгә беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, битараф ҡала алмайбыҙ. Беҙ - әсәләр, уларҙы ла беҙ тыуҙырабыҙ, беҙ тәрбиәләйбеҙ, тимәк, Аллаһы Тәғәлә алдында улар өсөн беҙ ҙә яуаплыбыҙ. Ҡөрьән-Кәримдә әйтелгән бит: ҡатын-ҡыҙ кеше генә түгел, ул кешенән юғарыраҡ торған йән эйәһе, ул - тәбиғәт. Шуның өсөн көслө заттарҙың яман ҡылыҡтары, шул арҡала күпләп үлеүе, сәләмәтлеге ҡаҡшауы, көндән-көн һәләкәткә барыуы беҙҙе лә борсой.*

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡатын-ҡыҙҙың бөтөн гүзәллеге - уның көсһөҙлөгөндә, тигән кемдер берәү. Шулайҙыр. Тик ҡайһы мәлдә, ҡайһы тәңгәлдә боҙолдо был тәбиғәт ҡануны? Ни өсөн ошо көсһөҙ зат үҙ иңенә көсө етмәҫ ауырлыҡтар йөкмәне, барлыҡ ғаилә бурыстарын да, йәмғиәт ҡатмарлыҡтарын да үҙ ҡулына алды һуң әле? Ир-егеттәребеҙ көсөнән, ғәйрәтенән, үҙ тәғәйенләнешенән ситкә тайпылғас, Хоҙай Тәғәлә үҙе шулай ҡарар иттеме юғиһә? Нисек кенә булмаһын, ҡатын-ҡыҙҙың - көсһөҙ, ир-егеттәрҙең көслө булыуы ҡалай яҡшы! Әйҙәгеҙ, һәр енестең үҙ урынында булыуына ярҙам итерҙәй саралар тураһында бергәләп уйлашайыҡ.**

*✓Артист Аллаһы Тәғәләнең ерҙән түгел, ә күктән атлап йөрөгән бер заты. Ул һоҡланғыс таланты, матурлығы, менән бөтәндәрҙән бер башҡа юғары һәм һәр ерҙә өлгө күрһәтергә тейеш.*

# ЯҘЫЛМАҒАН ҠАНУНДАР,

## йәғни Артист йәмһеҙ көйө тамашасыға күренергә тейеш түгел





**Ҡатын-ҡыҙҙарҙың көтөп алынған байрамы алдынан гүзәл заттың батырҙарҙы йән аямаҫ алышҡа, сәсәндәрҙе, рәссамдарҙы, композиторҙарҙы үлемһеҙ ижадҡа илһамландырған, хатта илдәр менән илдәр араһында һуғыш уты тоҡаныуға сәбәпсе булған матурлығы тураһында һөйләшмәһәк, яҙыҡ булыр. Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ республикала танылған сәнғәт оҫталары - ғүмерен опера сәнғәтенә бағышлаған, 70 йәше тулғанда ла тәҫ ташламай, тәбиғәттән бирелгән матурлығын һаҡлай белгән Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Зәйтүнә ҒӘЗИЗОВА менән сәнғәт донъяһына яһаған тәүге аҙымдарынан уҡ үҙен үҙенсәлекле талант эйәһе итеп танытҡан Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Гөлнара ВӘЛИТОВА.**

**▶ Кешеләр күңелендә тормошҡа һөйөү, матурлыҡ, зауыҡ тәрбиәләүсе сәнғәт донъяһына юл алыуығыҙға тәбиғәт биргән талант һәм хыялдан тыш, ниндәй ҙә булһа ваҡиға ла сәбәпсе булғандыр? Театрға юлығыҙҙың шишмә башы ҡайҙан?**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Бала сағымдан музыканы яраттым. Өйөбөҙҙә ҡурай, мандолина, думбыра, скрипканан ағылған нәфис көйҙәрҙе тыңлап үҫтем, сөнки ҙур ғаиләбеҙҙәге һәр кем ниндәй ҙә булһа берәй музыка ҡоралында уйнарға маһир булды. 50-се йылдар башында Өфөгә 9-сы (әлеге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернаты) интернат-мәктәпкә уҡырға килдем. Унан һуң музыка училищеһында уҡыным, филармонияла Бәхти Гайсин һәм Хәбир Ғәлимовтың бригадаһында эшләп тә алдым. Яҙмыштыр, күрәһең, барыһы ла һинең тауыш менән баянға түгел, ә фәҡәт ҙур оркестрға ҡушылып йырларға кәрәк, уҡырға бар, тип кәңәш бирә ине. Свердловск консерваторияһына уҡырға киттем һәм опера сәнғәтенә юлым шул уҡыу йортон тамамлауҙан башланды...

**Г. ВӘЛИТОВА:** Ә мин үҙемде белгәндән алып сәхнәләмен. Шулай ҙа тәүҙәрәк милиционер булырға хыяллана торғайным. Ләкин сәнғәтте яратыуым, сәхнәгә тартылыуым көслөрәк булып сыҡты. Профессиональ сәнғәткә, театрға юлым Стәрлетамаҡта мәҙәни-ағартыу училищеһында һәм Өфө дәүләт сәнғәт академияһында белем алыуҙан башланды.

**▶ Һеҙ күптән инде республикала билдәле шәхестәр. Ижади ҡаҙаныштарға, тамашасының алҡыштарына өлгәшкәнһегеҙ. Шулай ҙа ғүмерегеҙҙең ниндәйҙер бер болоҡһоу мәлендә күңелегеҙҙә, мин был һөнәрҙе һайлап яңылышмаһыммы, тип үкенергә тура килмәнеме?**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Был һорауығыҙға мин шиғыр юлдары менән яуап бирәм:

Үткәндәргә һис тә үкенмәйем,
Тура юлдан һәр саҡ атланым.
Дәрәжә, тип бер ҙә сапманым,
Намыҫымды бысратманым,
Намыҫымды һаҡланым.

**Г. ВӘЛИТОВА:** Мин дә Хоҙай тарафынан тәғәйенләнгән һөнәремә эйә булдым, тип уйлайым һәм быға һис тә үкенмәйем. Күңелеңә ятҡан эш менән шөғөлләнеүҙән дә ҙур ҡыуаныс юҡ.

**▶ Һөнәрегеҙ үҙе үк матурлыҡ донъяһы менән ауаздаш. Хоҙай биргән талантығыҙ менән кешеләр күңеленә илаһи матурлыҡ орлоҡтары сәсәһегеҙ. Матурлыҡ төшөнсәһен тәүҙә нисек аңлай торғайнығыҙ һәм аҙаҡ ул ниндәй һынланыш алды?**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Матурлыҡты төрлөсә аңларға, ҡабул итергә, төрлөсә күрергә була. Мин, мәҫәлән, бала саҡтан тәбиғәте менән зыялы, тәрбиәле, күңеле матур кешеләр араһында үҫтем. Атай-әсәйем дә алдынғы ҡарашлы, аҡыллы кешеләр ине. Улар беҙгә яҡшы тәрбиә бирҙе. Шул мөхиттә тәрбиәләнгән миңә сәнғәт донъяһына килеп инеп, тормоштоң әсе дөрөҫлөгө, ысынбарлыҡ менән осрашыу үтә ауыр тәьҫир итте. Сөнки мин тәү ҡарауға матур, ябай һымаҡ күренгән, әммә ысынында үтә ҡатмарлы мөнәсәбәттәргә әҙер түгел инем. Ябай ғына миҫал: әҫәрҙәге ролде бер генә йырсы түгел, бер нисә йырсы әҙерләй. Ә ижад кешеләре араһында кемдәр генә юҡ - ярамһағы ла, әхләҡи тотанаҡһыҙы ла һәм нисек тә үҙен күрһәтергә тырышыу, кемдәндер алғараҡ сығыу өсөн бер-береһен һатырға әҙерҙәре лә. Миңә был ҡатмарлы донъяла үҙем булып ҡалырға ярҙам иткән ихтыяр көсө, сабырлыҡ һәм матур тауыш биргән Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтлемен. Бер ваҡытта ла түбәнселеккә төшөп, дуҫтарыма хаслыҡ ҡылып йөрөмәнем. Тышҡы йөҙкиәфәте һылыу булып та, күңеле ярлы, уйы насар кешеләрҙе матур тип әйтеп булмай...

**Г. ВӘЛИТОВА:** Матурлыҡ кешенең үҙенә генә хас шәхси бер үҙенсәлеге ул. Бала сағымда кем минең менән аралаша - шулар минең өсөн донъялағы иң матур кешеләр һанала ине. Мәҫәлән, бер синыфташымдың ҡалын-ҡалын китаптарҙы мөкиббән китеп, ике сәғәт эсендә уҡып бөтөүен иң матур күренеш итеп ҡабул итә торғайным. Аҙаҡ, әлбиттә матурлыҡ төшөнсәһе икенсерәк мәғәнәләр ҙә ала башланы. Ғөмүмән, кеше үҙенең матурлығын башҡарған матур эштәре менән раҫларға тейеш, тип уйлайым.

**▶ Сәнғәт кешеләре булараҡ, театр сәхнәһендә генә түгел, ә йәмғиәт алдында ла һеҙ матур булырға бурыслы, тигән төшөнсәгә ҡарашығыҙ...**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Бик тә ыңғай ҡарайым, сөнки мин сәхнәләге образына, ижадына, талантына һоҡланып йөрөгән ҡайһы бер артистарҙы көндәлек тормошта бик насар ҡиәфәттә күреп, уның булмышына күңелем һүрелгәне бар. Кешеләр артисты урамда күрә һалып бара бит ул, шунда уҡ таный. Хоҙай Тәғәлә уның яҙмышына сәнғәткә хеҙмәт итеү бурысын яҙған икән, ул бәҫен, дәрәжәһен төшөрмәй, хатта ихатаға сүп түгергә сыҡҡанында ла үҙен лайыҡлы тоторға, ҡайҙа ла тамашасыһын ихтирам итергә бурыслы.

**Г. ВӘЛИТОВА:** Зәйтүнә апай, һис һүҙһеҙ, хаҡлы, сөнки артист Аллаһы Тәғәләнең ерҙән түгел, ә күктән атлап йөрөгән бер заты. Ул һоҡланғыс таланты, матурлығы, менән бөтәндәрҙән бер башҡа юғары һәм театр сәхнәһендә генә түгел, ә көндәлек тормошта халыҡ араһында булғанында ла өлгө күрһәтергә тейеш. Тамашасы бит театрға күңел асыр өсөн генә түгел, ә йәшәйештә үҙен борсоған бик күп һорауҙарға яуап алыр өсөн дә килә һәм сәхнәлә геройҙың иң сетерекле мәлдәрҙә дөрөҫ ҡарар ҡабул итеүенә һоҡланып, артистың Хоҙай тарафынан бирелгән тәбиғи булмышын шул образ менән сағыштырып яратыусан. Шуның өсөн сәнғәт кешеһе йәмғиәт алдында ла яуаплы.

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Студент сағымда Сапрыгина тигән иҫ киткес талантлы, данлыҡлы йырсының "Хованщина" операһында Маша арияһын башҡарыуын тыңларға барҙым. Иҫ киткес матур йырланы, үҙе лә балҡып тора ине. Тамаша һуңынан уны аҙ ғына булһа ла яҡындан күреп ҡалыр өсөн театр янында көтөргә булдым. Бер мәл яй ғына атлап, алама ғына пальто кейгән, йонсоу йөҙлө йырсы сығып килә. Сәхнәләге образына һоҡланыуҙан тулҡынланған миңә уны шундай сүрәттә күреү шул тиклем ауыр булды. Иртәгәһен дәрескә килгәс педагогым, уның йырлауы оҡшанымы, тип һорашҡайны, бер ҡатлылығым менән: "Оҡшағайны ла ул, тик ниңә артист хәйерсе кеше һымаҡ кейенеп йөрөй икән, уға ҡарата күңелем һүрелде лә ҡуйҙы",- тинем. Ғөмүмән, артист спектакль һуңынан хатта яңылыш та арыған килеш тамашасы күҙенә салынырға тейеш түгел. Был яҙылмаған закон...

**▶ Һеҙ ниндәй стилдә кейенергә ярataһығыҙ? Айырым ғына берәй тегенсегеҙ бармы?**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Бер ниндәй ҙә махсус тегеүсем булманы. Кеше үҙенең кәүҙәһенә, йөҙөнә килешле итеп зауыҡ менән кейенергә тейеш. Ҡиммәтле тун, ҡиммәтле тиренән тегелгән шапка, алтын биҙәүестәр мотлаҡ түгел. Иң мөһиме, кейемеңдең тәбиғи фиғелеңде тағы ла матур итеп күрһәткән ҡупшы булыуы фарыз. Ә биҙәнеүгә килгәндә, мин бер ваҡытта ла биҙәнмәнем һәм ниндәй косметиканы ниндәй фирма етештереүен дә белмәйем.

**Г. ВӘЛИТОВА:** Минеңсә, гүзәл зат бигүк белендермәй генә биҙәнергә тейеш. Биҙәнеү күҙ тейеүҙән һаҡлай, тигән ышаныу бар. Мәҫәлән, борондан күҙгә һөрмә тартыу бар. Һөрмә тартыу күҙ пәрҙәһен һаҡлай, тиҙәр. Йәш саҡта былай ҙа матур булаһың, шуның өсөн гүзәл затҡа сағыштырмаса олораҡ йәштә, йәғни 45 йәштәрҙән һуң сама белеп кенә биҙәнә башларға мөмкин.

**▶ Байрам табындарына, ғәҙәттә, ниндәй ризыҡтар әҙерләргә яратаһығыҙ?**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Мин әүәлдән иттән һәм емеш- еләктән бешерелгән ризыҡтарҙы яратам. Һәр ваҡыттағыса, табында һалма, тултырма, тәмле һурпа һәм башҡа итле ризыҡтар буласаҡ.

**Г. ВӘЛИТОВА:** Байрам табынымды, һәр ваҡыттағыса, еләк, балан, муйыл бәлештәре, бауырһаҡ, лоҡом, ҡош теле һәм башҡа тәмле-татлы ризыҡтар менән тултырасаҡмын.

**▶ Ҡатын-ҡыҙҙарға байрам уңайынан ниндәй теләктәр еткерергә теләйһегеҙ?**

**З. ҒӘЗИЗОВА:** Гүзәл зат нисә йәшендә лә саялығын юғалтмай, мөләйем, һөйкөмлө гүзәл зат булып ҡалһын. Йәш ҡыҙҙар киләсәктә үҙҙәренең буласаҡ әсәләр икәнлеген иҫенән сығармаһын, әҙәпле, инсафлы булһындар. Иң мөһиме, Хоҙай Тәғәлә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға бала ҡайғыһы күрһәтмәһен.

**Г. ВӘЛИТОВА:** Һәр ваҡыттағыса нәфис, матур булһындар. Матурлыҡ ҡатын-ҡыҙҙа үҙ-үҙенән ҡәнәғәт булыу тойғоһон нығыта, ә үҙеңдән ҡәнәғәт икәнһең, ҡайҙа ла үҙеңде ышаныслы тотаһың, күңел төбөнә йәшерелгән төплө фекерҙәреңде ҡыйыу итеп яҡлай беләһең, нимәгә ынтылһаң да маҡсатыңа ирешәһең. Үҙҙәренең гүзәл зат икәнлеген байрамда ғына түгел, ә башҡарған эше, күңел матурлығы, аҡылы һәм тормоштағы һәр аҙымының матурлығы менән раҫларға онотмаһындар.

**Римма ҒӘББӘСОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

---

*ӘЙТӘГҮР!*

# УҢҒАН ҠАТЫН...

## ҡар өҫтөндә лә усаҡ яға

**? Ҡатын-ҡыҙ һәм етәксе. Һеҙ ошо ике яуаплы вазифаны нисек итеп уңышлы яраштыра алаһығыҙ?**

**Наилә УСМАНОВА, "Салют" санатор-һауыҡтырыу лагеры директоры:**

- Яҡшы етәксе булыу өсөн бер төптән эшләрҙәй, татыу, яҡшы коллектив кәрәк, үҙеңә лә хеҙмәткәрҙәреңә һөҙөмтәле эшләү өсөн тейешле шарттар булдырыу, квалификацияһын күтәреү фарыз. Иң мөһиме - өлгәшелгәндәрҙә туҡтап ҡалырға ярамай, үҙ ҡаҙаныңда ғына ҡайнағанда үҫеш булмай. Берҙәмлектә - көс.



Эшең яҡшы барһын һәм маҡсаттарыңа ирешеү өсөн ғаиләңдең һиңә терәк булыуы, күңел тыныслығы кәрәк. Был йәһәттән, Аллаға шөкөр, уңдым - ирем һәйбәт, мине һәр ваҡыт аңлай, төплө кәңәштәре менән ярҙам итергә тырыша. Ә әсәлек тойғоһо, кем булыуыңа ҡарамаҫтан, ул һинең ҡаныңа һеңгән, әсәлек бурыстары ла иңеңдә булмаһа, тормоштоң ни ҡыҙығы ҡала? Ә бит эштә өлгәшкән уңыштарыңды барлаһаң, уларҙың барыһы ла ғаилә хаҡына эшләнелгәнен аңлайһың. Сөнки уңыштарың ғаиләләге яҡшы мөнәсәбәттәргә лә йоғонто яһай, яңынан-яңы үрҙәргә лә дәртләндереүсән.



Мин маҡсат ҡуйып эшләргә яратам. Уға ирешһәм, икенсеһен эҙләй, яңы уй-ниәт менән яна башлайым. Ҡатын-ҡыҙ ҙа бит шул уҡ тулы хоҡуҡлы етәксе. Ир-егет һалҡын ҡарашы, мөһабәтлеге менән алдырһа, ҡатын-ҡыҙҙа яуаплылыҡ көслө, гүзәл зат күңел ныҡлығы, тырышлығы менән өҫтөн. Ҡайҙа, кем генә булып эшләмәһен, ул ҡатын-ҡыҙ булып ҡалырға, наҙлылылығын, нәзәкәтлеген юғалтмаҫҡа тейеш, балаларына ла иғтибарын кәметмәҫкә, ата-әсәһенә хөрмәт күрһәтергә бурыслы. Ә инде етәксе булғас, өйҙә лә, эштә лә яуаплылыҡ арта төшә. Эштә хәстәрлекле, алдынғы ҡарашлы етәксе булһаң, өйгә ҡайтып кереү менән ҡатын, әсә роленә инә белергә, ҡатын-ҡыҙ бурысын теүәл үтәргә кәрәктер. Шунда ҡатын-ҡыҙҙың бөйөклөгө танылалыр. Хоҙай Тәғәлә биргән иң бөйөк вазифа - ҡатын-ҡыҙ, әсә булыуҙы оло яуаплылылыҡ менән башҡарырға тейешһең, ә етәксе булыу икенсе пландағы эшең.

***Оҙаҡламай автоматтар тотоп милиционерҙар килеп етте. Мунсаны ҡамап алдылар. Һөрән яңғыраны:***
***- Таһир, сыҡ! Һине ураттыҡ. Ҡаршылашыу файҙаһыҙ!***

# Һуңғы бәрҙе

**Ғәлим ХИСАМОВ**

**(Хикәйә)**

Етәксе йәнә ҡысҡырҙы:

- Бынан һинең ауыл ун саҡрымлапта ята. Ошонда төшөп ҡалғас, моғайын, ҡайтырға самалағандыр, тибеҙ. Әммә өйөнә килгәне юҡ, унда беҙҙең бағауыл ултыра. Ҡайҙа булыуы ихтимал? Уйла.

Төрлөсә фараз итте, ергә төшкәс тә шул башынан сыҡманы. Әммә йүнле фекер тыуманы әлегә.

Ауылда вертолетты ҡаршылаусы булманы. Тырылдаҡ машина күктән төшөү менән кеше йыйылып китер инде, тип көткәйне Морат, берәү ҙә күренмәне. Шуға уның осоп ҡайтҡанын белмәне лә ауылдаштары. Бер нисә еүеш танау ғына ауыҙын асып алыҫтан күҙәтеп торҙо.

- Мин үҙебеҙҙең өйгә генә инеп сығайым да сумаҙанды ҡалдырып, - тип ҡулындағына ымланы Морат, - шунан һеҙҙең янға килеп етермен.

- Тиҙ йөрө. Һин ауылға ялға ҡайтмағанһың, хеҙмәттә.

- Төркөм етәксеһенең киҫәтеүенә Мораттың әҙерәк хәтере ҡалды. Өйҙә Мораттың ҡапыл килеп инеүенә аптыранылар.

- Әллә күктән төштөңмө?- тигән булды атаһы.

- Эйе, күктән. Вертолетта осоп ҡайттым.

- Ә-ә, вертолетта. Таһирҙы эҙләгән теге сиңерткәләме ни? Улар бында аҙнанан ашыу тыр ҙа тыр һауа телә инде. Кеше ғәжәп итә. Бүтән эштәре юҡмы икән ни, тип. Таһир бында булһа ла, таба алмайҙар. Беҙҙең ҡалын урманды вертолет менән һөҙөп ҡара, кәбән эсендә энә эҙләгән һымаҡ.

- Табырбыҙ, - тип ебәрҙе Морат.

- Әллә һин дә шулар араһындамы?

- Мин бит прокуратурала эш башланым.

- Юҡҡа ҡыҫылғанһың, улым. Алыҫ булһа ла, ағай бит ул һиңә. Ике кеше һуйған өсөн уға хөкөм атыу ғына инде. Шунан "Таһирҙы Морат атты", тип әйтерҙәр. Дәрәжә өсөн ағаһының башын ашаны, тиерҙәр.

- Ни эшләп улай тиһендәр? Кеше аңра һарыҡмы ни? Таһирҙың ике кеше үлтергәнен, мылтыҡ тотоп ҡасып йөрөгәнен һәм йәмғиәт, шул уҡ ауыл кешеләре өсөн бик ҡурҡыныс икәнлеген бөтәһе лә белә бит..

- Ә һинең уны тоторға йөрөгәнеңде белмәйҙәр. Белмәҫ борон был эшкә ҡатнашыуҙан, улым, баш тарт. Кеше һүҙе кеше үлтерә, тиҙәр. Әҙәм балаһы бит хәлдең ҡайһылай икәнлеген асыҡлап тормай, һөйләй ҙә ҡуя. Икенсеһе шуға ышана. Ғәйбәт икәнлеген белһә лә. Сөнки кеше күңеленә һалынған беренсе орлоҡ, беренсе һүҙ бик тиҙ үҫә һәм тамыры ҡоромай. Атайыңдың әйткәнен тыңла. Етәкселәреңә әйт. Юғиһә үҙем барам. Эшкә төшөп кенә торғаныңда, юлдың батҡылын һайлама, һинең ғүмер алда, таҙа, саф һәм ышаныслы юлдан башла.

Морат атаһын тыңлап аптырап торҙо. Ошондай матур, юғары һүҙҙәрҙе ҡайҙан белә икән ул? Элек бер ҙә улай һөйләмәй торғайны. Әллә Морат иғтибар итмәнеме икән?

Шул саҡ күрше ҡарсыҡ килеп инде.

- Ай, ҡунаҡ бар икән дә баһа. Һаумы, улым, - тип Морат менән күреште. - Ярар мин һуңғараҡ инермен, мәшәкәтләмәйем, - тип сыға башлағайны. Мораттың әсәһе һуҡранды.

- Ул ниткән эш тә, боролоп барасы. Күреп тораһың, сәй ултыртып йөрөйөм. Алыҫтан килгән күстәнәстән ауыҙ ит.

Ҡарсыҡ башҡалар менән сәй эсте лә, ҡуҙғала башланы. Ишек тотҡаһына тотонор алдынан:

- Морат балыҡҡа баралыр инде бөгөн. Бәрҙе шәп ҡаба, ти. Шулай ҙа кискелеккә беҙгә сәйгә инерһегеҙ әле, - тине.

- Юҡҡа мәшәкәтләнмә, инәй. Мин кискә табан кире китәм...

- Вертолет менәнме ни? Һине вертолеттан төштө тинеләр бит.

Морат аптыраны ла ҡуйҙы. Ауыл кешеләренән берәү ҙә күрмәне лә баһа уны. Ҡарсыҡ сығып китте.

- Тотондо инде уҫаҡ япрағы шыбырларға, - тине Мораттың атаһы. - Хәҙер ауылды тултыра инде яңы хәбәр менән...



Морат сәйҙән тороп, ауылдың аръяғына ғына сығып барғанда ҡапыл ағас артынан бер малай килеп сыҡты. Ҡулында ҡалын быяла.

- Ағай, һаумы?

- Һау ғына. Ҡулыңда нимә ул? Лупамы?

- Эй ҙә... - Теге ҡулын артҡа йәшерҙе. Шунда бер уй Мораттың мейеһен телеп үтте:

- Шерлок Холмс кеүек лупа тотоп енәйәтсе эҙләйһегеҙме әллә? - Былар бит ауыл менән хәҙер эҙсе булып маташа.

- Эй, ҙә... Минең лупа насар, үҙем генә яһап алдым. Ана Хәмиттеке настоящий, магазиндан алған.

Морат китә башланы.

- Ағай, ағай, туҡта әле, - малай уның ҡулынан эләктереп алды. - Ағай, вертолетҡа ултыртып йөрөтһәң, бер нәмә әйтәм.

Морат аптырап ҡалды. Атаһы хаҡлы булып сыҡты. Уның күктән осоп төшкәнен ауылда һәммәһе лә белә.

- Тәүҙә хәбәреңде әйт.

- Юҡ, һин ултыртырға һүҙ бир.

- Кит, юҡ менән башыңды ҡатырма. Ултыртып йөрөтөргә вертолет машинамы ни һиңә? - Морат атлайһы итте. Малай уның ҡулынан тартып, алан-йолан ҡаранып, Мораттың ҡолағына бышылданы.

- Мин Таһир бабайҙың ҡайҙалығын беләм.

- Ҡайҙа?

- Фатих олатайҙарҙың мунсаһында ултыра.

- Ҡайҙан беләһең?

- Инәй унда ашарға ташый. Ике көн күҙәттем инде. Һауыт-һабаны тултырып әпкерә лә бушын тотоп сыға.

- Ни эшләп тегеләргә әйтмәнең? - Вертолет яғына ымланы.

- Эй, унда урыҫтар... Йөрөтәбеҙ тиһәләр ҙә алдайҙар улар. Һин -үҙебеҙҙеке. Килеште Морат:

- Ярар, әйткәнең дөрөҫ булһа, ултыртырбыҙ вертолетҡа.

- Ур-ра!

- Ҡысҡырма, иҫәр. Был турала берәүгә лә әйтмә, һинең һүҙеңдең дөрөҫлөгөн тикшерәбеҙ әле беҙ.

- Ярар. - Малай туғайға инеп йылп юҡ булды.

Моратҡа атаһы әйткәнде түгел, малай менән һөйләшкәнде еткерергә кәрәк төркөм етәксеһенә.

- Кит әле, - тине уныһы. - Беҙ аҙна инде урман һөҙәбеҙ ерҙән дә, күктән дә. Ә ул бында ята тиген.

- Әллә. Малай һүҙе генә бит.

- Тикшерәбеҙ хәҙер, әйҙә. - Етәксе күрһәткән өй яғына атлай башланы. Морат атаһының һүҙен тота була, исмаһам урам буйлап былар менән ҡуша йөрөгөһө килмәгәйне. - Әйҙә, әйҙә, - тип ҡабаландырҙы төркөм башлығы. - Ҡарсыҡ менән һин һөйләшерһең. Һин бит уларға яҡын. Миңә әйтмәгәнде һиңә әйтәләр.

Моратҡа ҡаршылашыр урын ҡалманы. Быларҙы күреү менән Фатих олатайҙың әбейе ҡойолдо ла төштө.

- Таһир тураһында бер ни ҙә белмәйем. Күргәнем дә, ишеткәнем дә юҡ. Вертолет менән эҙләй тиҙәр. Бүтәнде белмәйем. - Ҡулдары ғына түгел, тауышы ла ҡалтырап тора. Һорау билдәһе кеүек булып кәкерәйгән кәүҙәһен усаҡ араһына йәшереп йәшерә.

- Мунсала ла берәү ҙә юҡмы, инәй.

- Юҡ-юҡ. Мунса буш.

Етәксе менән Морат бер-береһенә ҡараштьі. Һикереп торған егет мунса яғына ыңғайлағайны, тегенеһе еңенән тотто.

- Ашыҡма. Ысынлап та унда ултырһа, маңлайына йәҙрә алырһың. Мин егеттәрҙе алып киләм, һин бында күҙ-ҡолаҡ бул. Мунсаға яҡын барма, - тип китте етәксе.

Морат өйгә инһә, әбей һикелә ята йомарланып тигәндәй, үҙе илай Моратты күрҙе лә һамаҡларға тотондо:

- Нишләп алып килдең бында ул кафырҙы? Былай ҙа бер аяғым түрҙә, береһе - гүрҙә. Ҡустыһын һатып үлде тиҙәр инде хәҙер. Берәрһенә әйтһәң, атам тине бит. Ата инде хәҙер...

Морат тышҡа сыҡты, арлы-бирле ҡаранды, әле генә салт аяҙ күкте болот ҡаплап бара. Егеттең күңеле болоҡһоу ине был мәлдә. Ҡайһылайтһа ла ҡыйын хәҙер. Әллә ҡайҙан юлыҡты бит Таһир ваҡиғаһына?

Оҙаҡламай автоматтар тотоп милиционерҙар килеп етте. Мунсаны ҡамап алдылар. Һөрән яңғыраны:

- Таһир, сыҡ! Һине ураттыҡ. Ҡаршылашыу файҙаһыҙ! - Яуап булманы. Йәнә ҡысҡырҙылар, йәнә - тынлыҡ. Өсөнсөгә яр һалдылар, барыбер өндәшеүсе юҡ. Өйҙән баяғы әбей килеп сыҡты.

- Әйтәм бит, юҡ ул бында, тип.- Әбей туп-тура мунсаға инеп китте, ишектәрҙе шар асты. - Бына ҡарағыҙ, юҡ бында берәү ҙә.

Етәксе, ҡулына пистолетын тотҡан көйгә, йүгерә-атлай, мунсаға етте, ҡапыл унда инде, кире сыҡты.

- Юҡ ул. Әммә булған. Мейес эсе тулы тәмәке төпсөгө...

Шул саҡ берәү ҙә көтмәгән хәл булды.

Тыныс ҡына баҫып торған төркөм етәксеһе ҡапыл янындағы әбейҙең яғаһынан алып, сикәһенә пистолетын терәне.

- Әйт, ҡайҙа ҡуйҙың!? - тип аҡырҙы. Саҡ торған ҡарсыҡ һығылып төштө. Морат араларына һикереп барып, әбейҙе тотоп ҡалды.

- Ни эшләтәһегеҙ? Үлтерәһегеҙ ҙә баһа.

- Үлһен. Ошондай убырлы ҡарсыҡтар арҡаһында енәйәтселәр үрсей... Яҡлап тора бит, - тип аңлатты теге үҙ ҡылығын.

- Яҡлар инде, туғаны бит...

- Туғаны, имеш. Белеп ҡуй, студент, - тине етәксе һуңғы һүҙгә баҫым яһап, - беҙҙең эштә кешеләр тик икегә: енәйәтселәргә һәм әлегә енәйәт яһамағандарға бүленә. Баррикада тик ике яҡлы була.

Әбей саҡ рәтләп тын ала башланы.

- Үлтерә икән тип торам, - тигән булды. - Былай ҙа бөткән йөрәкте...

**V**

Таһир үҙенең ни ҡылғанлығын, мунсала байтаҡ төн һәм көн уҙғарғас ҡына, төшөндө. Көн һайын пырылдап оҫҡан вертолет тауышы һәм баяғы әбейҙең уны эҙләүҙәре тураһында иҫкәртеүе аңына еткерҙе. Ҡатыны менән ҡәйнәһен язалап үлтереүен аңлауынан ҡото осто. Нисек итеп мин кеше ғүмеренә яҫҡына алдым икән, тип аптыраны. Кеше тигәнең үҙе лә бигерәк көсһөҙ, хәлһеҙ йән эйәһе инде. Ҡото алынһа, һис нәмәгә лә ҡаршы тора алмай, бер һуғыуға үлеп бара. Уның бөтә көсө, ғәйрәте телендә. Теле менән аҡылын аса, теле менән ағыуын сәсә. Ҡатыны менән ҡәйнәһе лә зәһәрен күп түкте шул Таһир өҫтөнә. Шул зәһәр зиһенен томалаған да инде. Ярар, булған эшкә салауат. Милиция эҙәрлекләй икән, әйҙә атһын. Бәлки тере көйө бирелмәҫкәлер. Барыбер үлтерәсәктәр. Тик...

Таһир ашарға алып ингән туғанынан ауылдағы хәлдәрҙе һораштырҙы.

- Кәримдең улы ҡайтҡан. Вертолет менән, - тине ҡарсыҡ.

- Ҡайһы улы?

- Уның улы берәү инде. Ҡалғандары шау ҡыҙ бит. Был малай гел ситтә йөрөнө. Әллә ҡайҙа уҡый, ти ине. Шуныһын да бөткән, дастуйын булып киткән, ти.

- Ә-ә, тик тора алмай бөрсә кеүек йыбырлап йөрөгән малаймы?

- Эйе.

- Беҙ уның менән бер йылды шаршыға мурҙа һалдыҡ. Дөрөҫөрәге, мин мурҙа ҡуйғайным инде. Ҡарарға тип килһәм, теге малай бот төбөнән һыу кисеп мурҙаһын минекенән ситкәрәк йәтешләп һалып йөрөй.

- Ни эшләйһең? - тип аҡырҙым. Иҫе лә китмәне. - Мурҙа һалам бит, күрмәйһеңме ни? - ти.

- Ни эшләп мин быуған тапҡырға һалаһың?

- Һин быуғанһың да ул, һыуҙың сите асыҡ ҡалған. Өҫкә үрләгән балыҡ тап ана шул ситтә ек эҙләй ҙә инде, - тип хәбәр яра бит был.

- Ярар. Әйҙә һалышам. Туңғанһың бит, - тип рәтләп ҡуйҙым мурҙаһын. -Төшә торғайны балыҡ. Мин икене алһам, уға берәү барыбер эләгә. Бер көн киске яҡта мурҙа ҡарайым тип барһам, теге малай ҡаршы осраны. Ҙур сұртанды утын кеүек ике беләгенә һалған да йүгерә-атлай килә. Шул малай дастуйын ир булғанмы?

- Эйе.

- Һин, апай, миңә энә менән еп алып сыҡ әле.

- Бынағайыш, ни эшләтәһең уны?

- Кәрәк. Аҡ еп булһын.

Бирҙе ҡарсыҡ һорағанын. Күп тә үтмәне, Таһир мылтығын тотоп сығып китте. Апаһы уны күрмәне, тип уйлағандыр. Ҡайҙа барғанын өндәшмәне. Мунсанан сығып, аҡаңлап ҡаранды ла, күҙҙән юғалды.

**VI**

Ҡайҙа барһа, ҡурҡыныс янамай уға? Морат төрлөсә фараз итеп ҡараны. Һорауҙарға йүнле яуап таба алманы. Вертолет йәнә тырылдап осто. Эй, баш ҡатырғыстар, тип уйлап ҡуйҙы эстән генә ул, йөрөйҙәр инде шунда яғыулыҡ бөтөрөп. Ҡуйы

✓ ***Әсәйем алдында ла ғәфү үтенгем килә минең. Ғәйепле булғандан түгел, иғтибар бүлеп еткерә алмағаным өсөн. Ҡояш кеүек, әсәй ҙә берәү генә бит.***



урман эсендә кешене вертолет менән табып буламы һуң инде. Кеше ҡурҡытып осалар шунда.

Баяғы малай йәнә күренде. Вертолетты башын бороп оҙатты ла, урам кәртәһенә терәлгән Моратҡа ҡул болғап, китеп барҙы. Ҡулында ҡармаҡ сыбығы. Балыҡҡа бара инде. Бая кем әйтте әле бәрҙе шәп ҡаба тип, бәрҙегә китте инде был малай.

Шунда ҡапыл күҙ алды яҡтырып киткәндәй булды, әйтерһең, төн ҡараңғылығын йыртып, күк ҡабағы асылды. Бәрҙелә бит Таһир! Шаршыла. Бәрҙе ҡапҡан саҡта Таһирҙы һыу буйына ебәрмәй бәйләп тә тотоп булмай, тигән уй мейеһен телеп уҙҙы һәм Морат йүгереп тигәндәй йылға буйына ынтылды.

Туғай буйлап бик абайлап атланы Морат. Шырлыҡта ни барлығы күренмәй. Шулай ҙа ул ян-яҡты ла, алдын да тишә күрерҙәй булып барҙы. Шаршыла һыу шаулағаны ишетелде. Аяҡ аҫтында сыбыҡ һынды. Морат икенсе аяғын күтәргән көйө, ҡатып ҡалды. Белгертә инде үҙен көн элгәре. Аҙыраҡ торғас, тағы атланы. Бына шаршы үҙе. Кемдер берәү күләгә яҡлап ҡармаҡ һала.

Әлбиттә ул. Шаҡмаҡ күлдәк кейгән, еңдәрен төргән, яланбаш. Ана аҡрын ғына ҡармаҡты ағыҙып ебәрҙе һәм шунда уҡ ҡулындағы сыбыҡты кире тартты. Ҡабаланмай ҙа, бик үк әкренләмәй ҙә, сыбыҡтың осон өҫкә күтәрҙе һәм һыуҙан сыҡҡан ялтыр бәрҙе Таһирҙың аяғы аҫтына килеп төштө. Ир өйрәнеп бөтөлгән хәрәкәттәрҙе ҡабатланы: балыҡты ҡармаҡтан ысҡындырҙы ла, ярға ташланы һәм ҡармаҡты яңынан емләп, һыуға ырғытты... Шул тиклем мауыҡҡан Таһир иғтибарһыҙ. Ике күҙе генә түгел, йәне менән тәне лә еп осона беркетелгән ҡармаҡҡа ҡушылған тиерһең.

Ҡайҙа һуң уның мылтығы? Әһә, үҙенән йыраҡ та түгел ағасҡа һөйәп ҡуйған икән. Алға атланы Морат. Иң мөһиме хәҙер тауыш сығармау. Ағас ботаҡтарын яҙа-яҙа, бесәй кеүек кенә баҫырға тырышты. Ә Таһир артына боролоп та ҡарамай, тик балыҡта ғына ҡайғыһы. Булды. Морат шым ғына һуңғы аҙымды яһаны ла мылтыҡты ҡулына алды һәм, бер аҙ артҡа баҫҡас, өндәште:

- Таһир ағай...

Таһир терт итеп ҡалды, ҡармаҡ ебе кире һүтелеп ҡуйҙы. Бер генә мәлгә артына боролоп ҡараны ла:

- Ә-ә, һинме? Шаулама, - тине һәм ҡапҡан балыҡты ярға һөйрәй башланы. Шул саҡта ғына артында кем тороуы зиһененә барып етте шикелле, һыуҙы болғата-болғата шаптырлап килгән балыҡҡа ҡарап ҡатып ҡалды. Энәнән бөгөп яһалған ҡармаҡтың рәте лә үҙе саҡлы инде. Балыҡты тулатһаң, ысҡыныуын көт тә тор. Был юлы ла шулай булды. Бәрҙе туланы-туланы ла, һыуға кире төштө. Ныҡ итеп ташланған таш һымаҡ ҡомп итеп кенә ҡалды. Морат ҡабатланы.

- Таһир ағай, әйҙә.

- Килдеңме ни? Һине ҡайтҡан, тиҙәр ине шул. Ә мин бәрҙе ҡармаҡланым. Күңелем булды. Күп әләкте. Эре, әй. Былдай эре бәрҙене күргәнем юҡ ине... Балыҡтарҙы алаһыңмы? Юҡмы? Ярар...- Шунан Морат ҡулындағы мылтыҡҡа ҡарап торҙо ла өҫтәне. - Үҙең килеп яҡшы иткәнһең. Ни тиһәң дә беҙ туғандар бит. Бәлки ташлама яһарһың. Элегерәк бер таныш судья әйтә торғайны: "Әйҙә, мин ултыртайым һине. Барыбер ултыртасаҡтар бит. Исмаһам, төрмә тәҙрәң ҡояш яғына ҡарар" ,- тип.

Былар икәүләп йәнәшәләп һәүетемсә генә һөйләшә-һөйләшә атланылар. Оҙаҡламай вертолет ултырған ергә лә барып еттеләр. Морат менән кем килгәнлеген танып ҡалған милиционерҙар Таһирға ташланды, ергә йығып һалдылар, ҡулдарын шаҡарып, аяҡтарын айырып, тентенеләр. Кеҫәһенән бәләкәй генә бәке ишараты сыҡты ла, аҙыраҡ аҡсаһын таптылар.

Оҙаҡламай вертолет осоп китте. Ҡармаҡ һабын болғай-болғай һыу буйынан был яҡҡа йүгергән малай тырылдаҡ урман аръяғына инеп юғалғас, өмөтһөҙләнеп ҡулын һелтәгәйне. Тик бер аҙҙан күктә тырылдаған тауыш йәнә сыҡты, ел-дауыл уйнатып теге малай баҫып торған ергә төшә яҙып туҡтаны. Ишек асылды ла Морат күренде һәм малайға ҡул болғаны: "Әйҙә!" Малай ҡармаҡ сыбығын бәрҙе лә йүгерҙе. Ул инеү менән вертолет кире күккә күтәрелде. Малай тәҙрәнән тышҡа күҙ һалды. Аһ-аһ, бейектән ҡарағанда ауылдары бәләкәй генә икән дә баһа, танырлыҡ та түгел.

**(Аҙағы. Башы 8-се һанда).**

*ИР-ЕГЕТ ЯРЛЫҠАУ ҺОРАЙ*

**Гәзитегеҙҙә "Ғәфү ит!" рубрикаһы асып, бик шәп иттегеҙ әле. Ҡыҙ-ҡатындар байрамы алдынан үҙем кеүектәр исеменән бөтөн ҡыҙ-ҡатындар алдында ғәфү үтенгем килә. Минең кеүек ғәфү үтенергә теләүселәр, ай-һай, әҙ түгелдер, тим!**

# Беҙ бит ғәйепле,
## әсәйҙәр, өләсәйҙәр, һөйгәндәр алдында...



Иң тәүҙә өләсәйҙәрем алдында ғәфү үтенер инем: балалығым арҡаһындалыр инде, уларҙың һөйөүен тойҙом, ә үҙем уларға һөйөү өләшә алманым. Өләсәйҙәр ейәндәрен иркәләр өсөн генә йәшәй, тип уйлағанмындыр инде. Эй, бер ҡатлылыҡ! Өләсәйҙәрем күптән инде фани донъяла юҡ. Уларҙың иркәләүе, кеҫәләрендәге бөтмәҫ күстәнәстәре, яҡты йөҙҙәре генә хәтергә уйылған. Ике өләсәй бергә саҡта, сутыр-сутыр, донъя хәлдәре тураһында һөйләшкәнен тыңларға ярата инем. Улар һәүетемсә генә һөйләшеп ултыралар ҙа, әңгәмәләренең ҡайһы бер урынында шыбырлауға күсәләр. Күрәһең, уныһы минең ҡолаҡҡа инергә тейешле хәбәр булмағандыр. Шыбырлашып алғас, тағы мин ишетерлек итеп дауам итәләр. Ә телдәре һуң, телдәре! Бөгөн улай һөйләшмәйҙәр. Өләсәйҙәрем ул саҡтың һутлы телмәрен үҙҙәре менән алып китте, буғай. Сәхнәләге "әбейҙәр" телен тыңлайым да, өләсәйҙәремде һағынам. Яһалма-яһалма инде - теле бар, һуты юҡ. Өләсәйҙәремде тыңлай-тыңлай ҡай саҡ йоҡлап китә торғайным. Уяныуыма улар, бер ни булмағандай, һаман да һөйләшеп ултыра торғайны. Оҙон итәкле күлдәктәрен ялпылдатып, тышҡа сығып инәләр ҙә, тағы һөйләшәләр. Баштарында яҙып ябынған яулыҡ, яҡты йөҙ, ҡулдарында шәл бәйләгән энәләр йүгерә...

Әсәйем алдында ла ғәфү үтенгем килә минең. Ғәйепле булғандан түгел, иғтибар бүлеп еткерә алмағаным өсөн. Ҡояш кеүек, әсәй ҙә берәү генә бит. Ҡояштың йылыһын тойһаҡ та, ҡасан беҙ ҡояшҡа рәхмәт әйткәнебеҙ бар? Шулай уйлап микән, бер ваҡытта ла әсәйемдең күҙҙәренә ҡарап, "Рәхмәт, әсәй!", тип әйткәнем юҡ. Ул уға мохтаж да түгел, шикелле. Шулай уйлап, бәлки, яңылышамдыр. Яңылышһам, "әсәй, зинһар, мине ғәфү ит!". Көслө һөйөү тойғоһо бар икән, ниңә уны ҡысҡырып әйтеп, йәмен боҙорға, тәмен юғалтырға, тип уйлайым мин ниңәлер. Мөйөш һайын ҡысҡырып, ауыҙ һыуын ҡойоуҙан һөйөү тойғоһо кәмер төҫлө тойола. Һинең тыуған көнөңдө лә билдәләгәнебеҙ юҡ, 8 Март менән дә мәктәп йәшендә уҡытыусылар ҡушыуы буйынса ғына ҡотлау бүләге алып ҡайта торғайным. Әммә һиңә булған һөйөү тойғоһо бик оло - быныһына иманым камил. Иң мөһиме, һин һау бул, тере бул - миңә, мәҫәлән, шунан башҡа бер ни кәрәкмәй. Әлбиттә, һин мине һаман да бала кеүек күреп, һуңғыңды өҙөп-йолҡорға әҙерһең. Һау булайыҡ, әсәй, рухыбыҙ тере булһын, донъя байлығы - аяҡ аҫтындағы сүп кенә!

Тәүге мөхәббәтем, һин дә ғәфү ит мине! Бәлки, ғүмер юлында бергә булырға тейеш булып та, бергә була алмауыбыҙ өсөн ғәфү ит. Иҫләйһеңме, һигеҙенсе класта саҡтағы күҙ асып йомған аралағы хәлде. Һин ни, тәртипле бала, беренсе рәттең беренсе партаһында ултыра инең, ә мин - "Камчаткала". Ниндәй дәрес булғандыр, иҫләмәйем, һин ҡапыл артҡа әйләнеп ҡараның һәм матур итеп йылмайҙың. Беҙҙең ҡараштар бер аҙға ғына осрашты, буғай. Тик, ниңәлер, ғүмерлеккә һинең күҙҙәреңдең төпһөҙ дарьяһына батҡандай тойҙом үҙемде. Ул көндө мин мәктәптән йүгереп ҡайттым. Сөнки аяҡтарым ерҙе тоймай ине. Мин ғашиҡ булдым! Элек әҙәби китаптарҙан уҡып, киноларҙан ҡарап белгән мөхәббәт тойғоһоноң ләззәтен ана шул ҡараштан башлап тойҙом, йәшәүемдең мәғәнәһен аңланым. Беҙ дуҫлашып киттек. Һин нисек атағанһыңдыр, минең өсөн ул тәүге саф мөхәббәт тойғоһо ине. Рәхмәт һиңә, үҫмер сағымды яҡтылыҡҡа сорнаның! Сәстәребеҙ сәскә бәйләнмәүе өсөн ғәфү ит...

Икенсе мөхәббәтем, һин дә ғәфү ит! Һөйөүем үтә лә көслө булған өсөн ғәфү ит мине. "Әсәйем һинең турала, үтә ҡыҙыл тиҙ уңа, тип әйтте", - тигәйнең һин бер мәл. Башҡа ҡыҙыл уңалыр, мөхәббәт кенә һүнмәй икән ул. Беҙ бит һинең менән биш йыл буйы бер бөтөн булып йәшәнек. Йәндәребеҙ йәнәш йәшәне, тәндәребеҙҙең һыуһыны ҡанманы. Шулай йәшәнек тә, тормош тигән юл сатында айырылыштыҡ - һинең үҙ юлың, мин дә яҙмышыма яҙылғанды лайыҡлы үтергә тырышып ятыуым. Һинһеҙ үтеүе генә күңелде һаман да өйкәй. Кем белә, бәлки, бергә ҡалһаҡ, беҙ суд аша рәсми айырылышҡан булыр инек. Сөнки мөхәббәтебеҙ йәмғиәт ҡанундарына һыймайынса, тик һөйөүҙән һәм тойғоларҙан ғына тора ине. Ирекле осраштыҡ, ирекле айырылыштыҡ. Әммә шул иректән бөгөн ирекһеҙлек тоям. Бүтәнсә ғашиҡ булыр инем дә, һөйкөмлө буйһыныңды һағынам, күңелеңдә юҡһынам. Ни эшләйһең, булыры-булған, ваҡыт яраларға шифаһын япҡан. Мин бөгөн бит һине түгел, шул саҡтағы образыңды ғына яратамдыр һымаҡ. Ниməһе аяныслы: йәнемдең икенсе өлөшөн мин бит һиңә тиклем дә эҙләй инем, һаман да эҙләйем. Тимәк, мин уны әле һаман да тапмағанмын. Бәлки ул эргәлә генәлер, ә мин, иҫәр, һаман һөйөүгә һыуһаған мосафир кеүек, юлдан тайпылмайымдыр. Минең кеүек иҫәрҙәр, ай-һай, әҙ түгелдер, тим. Минең кеүек иҫәрҙәр шулай ғүмер буйы йәненең икенсе өлөшөн эҙләйҙер ул. Эҙләйҙер ҙә ... ерҙә ер кешеләре кеүек йәшәү өсөн ғаилә ҡоралыр. Шуға ла бөтөн ҡыҙ-ҡатындар алдында ғәфү үтенәм дә инде. Берәүҙәрҙе яратабыҙ ҙа, икенселәргә өйләнәбеҙ шул.

Ҡатыным, балаларымдың әсәһе, һин дә ғәфү ит мине. Ғаилә ҡороу өсөн үҙеңде миңә ҡорбан иткәнең өсөн ғәфү ит. Ғәфү итегеҙ, ҡыҙ-ҡатындар!

**Кинйә ШӘМСИНУРОВ.**

*АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ*

# Тимер рухлы... Шәрифә

**Бөйөк шағирыбыҙ Рәми Ғарипов һүҙҙәре менән әйткәндә, "ҡанлы тантана" арҡаһында меңәрләгән аҫыл ир-егеттәребеҙ һәм ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы юғалтыуға быйыл 70 йыл тула. Арҙаҡлы шәхесебеҙ Шәрифә Тимерғәлина ла улар иҫәбендә булды.**

Башҡорт халҡының талантлы ҡыҙы, республика комсомолының етәксеһе, ВЛКСМ Үҙәк Комитеты секретары, СССР Юғары Советы депутаты Шәрифә Тимерғәзи ҡыҙы Тимерғәлинаның тормош юлы Октябрь революцияһынан һуң яңы тормош төҙөүгәең һыҙғанып тотонған бик күп әүҙем йәштәребеҙҙекенә оҡшаш.

Шәрифә 1910 йылда Ҡонашаҡ районының Ҡәнзәфәр ауылында тыуа. 1921 йылғы аслыҡта бөтөн туғандары ла үлә. 11 йәшлек Шәрифәне ошо уҡ райондың Һары ауылы балалар йортона ебәрәләр, унан һуң В. И. Ленин исемендәге мәктәпкә оҙатыла. Мәктәптә тәрбиәләнгән һәм уҡыған йылдарында үҙен әүҙем һәм оҫта ойоштороусы итеп күрһәтә, шуға ла уны ВЛКСМ Өлкә Комитетына эшкә алалар һәм бюроға ағзалыҡҡа кандидат итеп күрһәтәләр. Артабан ВЛКСМ Өлкә комитетында бүлек мөдире, икенсе секретарь һәм 1931 йылда инде беренсе секретарь итеп һайлана.



Тап ошо йылдарҙа йәштәрҙең республика тормошонда, төҙөлөштә, сәнәғәттә, ауыл хужалығында әүҙемләшеүе башлана. Ниндәй генә яңы төҙөлөш булмаһын, яңы яҡтылыҡ асылмаһын, йәштәр алдынғы сафта була. Былар, әлбиттә, Шәрифә Тимерғәлинаның ойоштороу һәләтенә бәйләнгән. Шул уҡ ваҡытта йәштәр иҫәбенән яҡшы әҙерлекле белгестәр ҙә арта. 1931-1932 йылдарҙа грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү эшенә бик күп йәш комсомолецтар ебәрелә.

Шәрифә Тимерғәлинаның абруйы артҡандан-арта бара. Уны "беҙҙең Шәрифә" тип кенә йөрөтәләр. 1934 йылда ул Парижда үткәрелгән конгреста Советтар Союзынан барған ҡатын-ҡыҙҙар делегацияһында ҡатнаша. Ул ВЛКСМ-дың X съезында делегат була һәм сығыш яһай. Үҙенең сығышында ҡатын-ҡыҙҙар араһында һүлпән эш алып барғандары, уларҙың мәнфәғәттәрен яҡлау буйынса тейешле кимәлгә күтәрмәгәндәре, ҡатын-ҡыҙ хоҡуғын тейешенсә яҡламағандары өсөн прокуратура эшмәкәрлегенә ҡарата байтаҡ ҡына тәнҡит һүҙҙәре әйтә. Ошо съезда Шәрифә Тимерғәлина комсомолдың Үҙәк Комитеты бюроһына ағза итеп һайлана һәм 1937 йылдың август айында уҡыусы йәштәр бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Ошо уҡ йылда ВЛКСМ Үҙәк Комитетының IV пленумы ҡарары менән ҡатын-ҡыҙ йәштәр менән эшләү буйынса секретарь итеп һайлана. Тәбиғи ойоштороу һәләте, зирәклеге арҡаһында ете йыл эсендә ил комсомолы етәксеһе дәрәжәһенә күтәрелә. 1937 йылдың 12 декабрендә СССР Юғары Советы депутаты итеп һайлана.

Халҡыбыҙҙың данлы ҡыҙының артабанғы яҙмышы меңәрләгән башҡа патриоттарыбыҙҙыҡына оҡшаш - ул Совет иленә ҡаршы алып барылған эшмәкәрлектә ғәйепләнеп, 1939 йылда атыуға хөкөм ителә. Шәрифәнән һуң уның ире Н. Бикмөхәмәтов та ҡулға алына.

1956 йылда СССР Юғары Судының Хәрби Коллегияһы комсомол етәксеһе Шәрифә Тимерғәлинаның эшен яңынан ҡарай һәм үлгәндән һуң аҡлай. Әммә уны халыҡ дошманы тип ҡулға алған саҡта ла халыҡ үҙ ҡыҙының ғәйепһеҙ икәнлеген белә, йөрәктәрендә уның яҡты иҫтәлеген онотмай ҡәҙерләп һаҡлай.

ӘЙТӘГҮР!

# Асылым көсһөҙ - заман көслө яһаны

**Гүзәл заттарҙың байрамы алдынан уларҙың үҙҙәренә "Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙға хас холоҡ-сифаттың берәйһен айырып маҡта, йә тәнҡитлә әле", тип мөрәжәғәт иттек.**

**Рәүилә МӘСӘЛИМОВА, БР-ҙың атҡаҙанған артисы:**
Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына оялсанлыҡ тигән сифат хас бит инде ул. Ул хатта артығы менән беҙҙә. Оялыу, бер ҡарағанда, үҙ-үҙеңә ышанып бөтмәү, эске комплекс уята. Ошо сифат, ҡыҙғаныска ҡаршы, күп осраҡта, хатта ғаилә тормошонда, аныҡлап әйткәндә, ирең менән енси мөнәсәбәттә лә ҡамасаулай ул. Ирҙәр яҡынлыҡ ваҡытында үҙен иркен тотҡан, оялмаған ҡатын-ҡыҙҙы ярата. Сөнки тән һәм йән азатлығы араларҙы тағы ла яҡынайтып, гармония тыуҙыра. Ә беҙ оялыу арҡаһында шул азатлыҡтан үҙебеҙҙе мәхрүм итәбеҙ.
Икенсенән, оялсанлыҡ беҙгә бик килешә. Йәш саҡта егеттәрҙең иғтибарынан ҡыҙарып- бүртенеп, тирләп сыҡҡансы ояла инем. Аҙаҡтан миңә "Шул оялыуың өсөн ныҡыраҡ яраттым да инде мин һине" тип әйтеүселәр ҙә булды. Һыуҙан тыныс, үләндән тәпәш булып йәшәүҙең дә үҙ мәртәбәһе бар.

**Флүрә КИЛДЕЙӘРОВА, РФ-ның халыҡ артисы:**
Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙың йөҙөндә үҙенә генә хас илаһи матурлыҡ нуры бар. Ҡарағыҙ, улар матур ғына түгел, һәр саҡ матурлыҡҡа ынтыла, матурлыҡты баһалай белә. Был сифат күңелендә рухи байытыуҙан, изгелеккә, яҡшылыҡҡа ынтылыуҙан килә.
Ҡайһы бер ҡатындарҙың: "Мин һеҙҙе иремдән көнләшә инем, һеҙҙе телевизорҙан күрһәтә башлаһалар, донъяһын онотоп ҡарап ултырыр ине", тип асылып ҡуйғандарын ишетәм. Был минең матурлыҡҡа баһа түгел, әлбиттә. Ә минең иждадыма, моңома һөйөү тип ҡабул итәм. Матурлыҡ матурлауҙы талап итмәй, тиһәләр ҙә, тәү сиратта уйҙарыңды, йөрәгеңде яҡтылыҡҡа йүнәлтмәй тороп, булмышыңдың ысын матурлығына өлгәшеп булмай. Гөлдә - сәскә, ҡатын-ҡыҙҙа әсә булыу биҙәй. Гүзәл заттың бөтөн сибәрлеген әсәй булыуҙа күрәм мин. Ошондай матурлыҡтан яҙҙырмаһын беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы Хоҙай.

**Линиза ШАКИРОВА, уҡытыусы:**
Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙы күркәмләүсе иң төп сифаттарҙың береһе - сабырлыҡ, әлбиттә. Ғаиләнең тотороҡлолоғон, татыулыҡты һаҡлауҙа сабырлыҡтың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ә шулай ҙа нимәгәлер өлгәшер өсөн сәләмәтлегең ҡаҡшар хәлгә етеп, үҙеңде түбәнһетеп түҙергә лә ярамайҙыр ул. Минең бер танышым ғаиләһен һаҡлап ҡалыр өсөн ғүмере буйы эскән ир менән түҙеп йәшәне. Оҙаҡ ваҡыт айнымай эскән ир сит ҡатындарға ла йөрөнө, ғаиләһендә лә йыш ыҙғышты. Кеше һүҙенән ҡурҡыу, ирһеҙ булған өсөн оялыу беҙҙең ҡатындарға хас бит инде ул, теш ҡыҫып түҙергә тырышабыҙ. Ул да шулай итте. Балаларының күңел донъяһы ҡыйралып, үҙенең түшәккә йығылған бөгөнгөһөн һис кенә лә сабырлыҡтың һары алтыны тип әйтеп булмай. Сабырлыҡты күп һынамайҙар, алтынға өлгәшер өсөн алтын урталыҡты һаҡлау кәрәк.

**Зөһрә КӘРИМОВА, эшҡыуар:**
Мәле менән сая, йүнсел дә була беләбеҙ беҙ. Ә бөгөн был сифаттар беҙгә ныҡыраҡ кәрәк. "Ҡатын-ҡыҙ ир-атҡа ҡарағанда көслөрәк", тигән фекер тағылды ла инде хәҙер беҙгә. Шуға маҡтанып, ғоурланып, ирҙәрҙән тағы ла алдараҡ барырға, ҡулдан килгәне-килмәгәненә йөрьәт итергә өйрәнеп киттек. Бына мин дә шул ышаныс менән үҙ эшемде асып ебәрҙем, тырыша торғас, уңып киттем. Ирем дә хөкүмәт эшен ҡалдырып, миңә ҡушылды. Әммә эштең иң яуаплыһы минең елкәлә: документтар артынан йүгерәм, тегеһен йүнләйем, быныһын хәстәрләйем. Һөҙөмтәлә эт ҡайышы кеүек йышылып, шымарып киттем. Ирем үҙен минән көсһеҙерәк тойоп, ә мине шул эште башҡарырға бурыслы итеп ҡарай башланы, мөнәсәбәттәр ҙә ҡырҡыулашты. Бына хәҙер ҡатын-ҡыҙ асылымдың тәбиғи гүзәллеге, көсһөҙлөгө, йомшаҡлығы һағындыра. Минең дә бит иркәләнгем, наҙланғым, көслө иңдәргә ышыкланғым килә.

**Рәсимә ИСМӘҒИЛЕВА, хужабикә:**
Уңған, эш һөйгән ҡатындың донъяһы ҡояш кеүек йылмайып тора. Бала саҡта күрше апайҙарҙың өйөнә инмәҫ ерҙән инге килеп тора ине. Тәтәй кеүек итеп йыйыштырып ҡуя. Иҙәндәренә баҫырға ла уңайһыҙ: һап-һары, тап-таҙа. Мейес тирәһендә тәмле еҫтәр сығарып, көн дә төрлө-төрлө мәмәйҙәр бешерә. Үҫкәс, тап ошондай ғына өйҙә йәшәргә хыял иттем. Уңғанлыҡҡа ынтылыу ысынлап та уңған итте мине.
Килен булып төшкән йылдарҙа ауылда "Уңған килен" тигән даным таралды. Ул ваҡытта икмәк тә һала белмәй инем. Әммә ҡәйнәмдең йомош ҡушҡанын көтөп тормайым, ҡулдан килгәнсә, уға ярҙам итәм. Белмәгәнемде һорайым. Белмәгән ғәйепле түгел, белергә теләмәгән ғәйепле. Тыумыштан уңған булмайҙар бит, атай-әсәйем өйрәткәндәргә өҫтәп-өҫтәп, уңғанлыҡҡа үҙем өлгәштем. Ҡәйнәмдең шуны баһалай белеп, тормош тәжрибәһен тәрән аҡыл аша еткереүен йылдар үткәс кенә аңланым. Уңғанлыҡ эште генә түгел, үҙеңде уратып алған донъяны мөкиббән яратыуҙан, өйрәнергә теләк булыуҙан камиллашалыр ул.

**Ғәлиә ИЛСЕҒОЛОВА яҙып алды.**

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# АҘДАН - ҠАНҒА, ҠАНДАН - ЗАҢҒА

## Яҡшы уҡытыусы юлға күндерә

**Гәзитебеҙҙең был рубрикаһы - халҡыбыҙҙың тәрбиәүи ҡанундары тураһында. Ошо ҡанундарҙы өйрәнеү маҡсатында тормошта ниндәйҙер уңыштарға өлгәшкән, халыҡ араһында абруй ҡаҙанған байтаҡ кешеләр менән осрашып, уларҙың атай-әсәйҙәре, өләсәй-олатайҙарының тәрбиә өлгөләрен өйрәндем. Ниндәй юҫыҡта тәрбиәләнгән улар, нәҫел ебенең ҡайһы яғынан аҡыл туплаған, зиһен яҡтылығы кемгә тартҡан? Үҙемдең уҡытыусым менән дә ошондай маҡсатты күҙҙән ысҡындырмай ғына әңгәмә ҡорам.**





Тынғыһыҙ ҙа, эшсән дә, талапсан да, етеҙ ҙә уҡытыусымдың иҫ китмәле изгелекле кеше булыуын бала сағымда аңлап етмәгәнмен. Ул саҡта, уҡытыусы шулай булырға тейештер, тип кенә ҡабул ителгән. Ә бит Иҫәнғол урта мәктәбендә беренсе тапҡыр асылған башҡорт кластарын ул һәр ваҡыт ҡурсалап ҡына йөрөттө. Был - беҙҙең йөҙәбеҙҙә милләт бәҫен төшөрмәү хәстәрлеге лә булғандыр: "Кейемегеҙҙе таҙа ғына йөрөтөгөҙ, әҙәпле булығыҙ, тәнәфестә коридорға сыҡҡанда, хахылдап көлмәгеҙ, һеҙ башҡаларға өлгө булырға тейешһегеҙ. Әйҙәгеҙ, концертта бик матур сығыш яһайыҡ, башҡалар көнләшеп торһон. Һин, Мәрйәм, шиғырҙы башҡортса ла, урыҫса ла һөйлә, башҡорт класында уҡығас, урыҫса белмәйҙәр, тип уйламаһындар", - гел ошондайыраҡ өгөт биреп, беҙҙә сәм уята ине ул.

Беҙ алты йыл буйы класс етәксеһе лә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ла булған Мәликә апайыбыҙҙың һәр әйткән һүҙен тыңлап, һәр ҡушҡанын үтәп, мәктәпте тамамланыҡ. Иҫәнғол урта мәктәбендә асылған иң тәүге башҡорт класы булғанлыҡтанмы, ни өсөндөр - белмәйем, һигеҙенсе, туғыҙынсы кластарҙа әҙәбиәт дәреслегебеҙ булманы. Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы шул көйө лә беҙгә ғәжәп бай йөкмәткеле дәрестәр бирә ине.

Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙына бик күптәр әҙәбиәткә, башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләгәне өсөн генә түгел, ә ваҡытында ярҙам ҡулы һуҙғаны, уҡыусы саҡта юлыҡҡан төрлө тайпылыштарҙан ҡурсалап алып ҡалғаны өсөн дә рәхмәт әйтә. Мыҡты ҡәүҙәле олпат ир-егеттәр йәки күптән инде әсәй, хатта өләсәй булған ҡатындар: "Һеҙ минең кеше булып формалашыуымда төп таяныс булдығыҙ", - тип, уға рәхмәтле йөҙ менән баға икән, тимәк, Уҡытыусы фәҡәт дәрес биреүсе генә булмаған. "Яҡшы кеше юлға күндерә", "Яҡшыға ят булмай", "Яҡшының бер һүҙе - мең алтын" һәм башҡа шуның һымаҡ изгелек, яҡшылыҡ тураһында ниндәй генә мәҡәлде алып ҡарама - барыһы ла Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы тураһында әйтелгән һымаҡ.

Хәйер, уның ярты быуатлыҡ уҡытыусылыҡ тормошонан бер нисә генә миҫал килтереп китеү ҙә уға әйтелгән рәхмәттәрҙең асылын сағылдырыр.

Мәликә Йосопова оҙаҡ йылдар йәшәгән, эшләгән тыуған Ейәнсура районының Иҫәнғол урта мәктәбендә уҡытыусылар кәңәшмәһе бара. Уҡыуҙа әллә ни өлгәшмәгән Илдарҙың яҙмышы хәл ителә. Профессиональ техник училищеға күсереү тураһында тәҡдимдәр була. Һүҙҙе Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы ала.

- Беҙ ул егетте әрәм итмәйек. Рәссам ул. Иждадсы. Башҡа предметтарҙан тартып һуҙып өлгәштерегеҙ ҙә, рәссамлыҡ юлы менән китһен. Мин класс етәксеһе булараҡ, уның өмөтлө рәссам икәнлеген беләм. Бына, ҡарағыҙ әле уның һүрәттәрен. 6-сы кластан башлап "Йәншишмә" исемле класс гәзитенең рәссамы ул... Ул тәбиғәтте үҙенсә күрә, үҙенсә аңлай. Тәбиғәт менән һөйләшә, уйлана. Тәбиғәт матурлығын күрә белгән кеше насар булмай... Бына, иншаһынан өҙөк уҡыйым: "Ике йылға ҡушылған ерҙә һәр ваҡыт балыҡсылар күп була. Балыҡсылар өндәшмәй генә ултыралар. Ни тураһында уйлайҙар икән? Улар тып-тын ҡалғандар. Ә кисен усаҡ яғып, уның тирәһенә йыйылалар. Усаҡтан күтәрелгән төтөн уларҙың уйҙарын күктәргә алып китҡән һымаҡ..." Ниндәй күҙәтеүсәнлек ул үҫмерҙә. Шунан, ҡалдырҙығыҙ ти ул баланы икенсе йылға. Үҙенән бәләкәйерәк балалар менән уҡыһа, белеме артыр тиһегеҙме? Уның мейеһе тулы хыялый һүрәттәр. Әйҙә, төшөрһөн. Уҡыр. Башҡа предметтарҙы ла уҡыр. Бирәйек егеткә өлгөргәнлек аттестаты. Әрәм итмәйек. Шулай итеп, Мәликә Йосопова уҡытыусылар кәңәшмәһе фекерен ҡапма-ҡаршы яҡҡа бороуға өлгәшә. Бөгөнгө көндә Илдар Туймаҡаев билдәле рәссам, үҙенсәлекле иждадсы.

Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы ғаиләһе менән Иҫәнғолдан Өфөгә күсеп килгәс, 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй һәм алмаштырғыһыҙ парторг була. Яратып башҡара ул эшен. Бында ла йәмәғәт башланғысында алып барған ошо вазифаһы бик күп яҙмыштарҙы ҡурсалап алып ҡалыуға ярҙам итә, сөнки парторг һүҙе - иң һуңғы һүҙ.

20-се мәктәптә данлыклы ҡурайсы Әҙһәм Искужин ҡурай түңәрәге ойоштороп ебәрә. 6-сы кластың башҡорт әҙәбиәте дәресе барған саҡҡа тура килә ҡурай түңәрәге эше. Ҡурайҙа шөғөлләнә башлауҙары була, тотош моң класс бүлмәһенә ишетелә. Өҫтәүенә, күнекмәләр башланыр алда Әҙһәм Искужин үҙе һәр саҡ берсә дәртле, берсә һағышлы көй уйнап ебәрә. Моң ишетелеү менән иң алғы парталарҙың береһендә ултырған Роберттың ҡолағы ҡарп итеп ҡала, күҙҙәре осҡон сәсеп, осоп ҡына сығып китерҙәй булып, ишек яғынан күҙен алмай.

- Ҡурай уйнарға өйрәнгең киләме?

- Эйе, Мәликә Ғибаҙулловна. Тик бына дәрес ваҡытына тура килә лә ҡуя.

✓ ***Кешеләр менән аралашыуҙың иң яҡшы ысулы - уларҙы ысын күңелдән ратыу. Һәр кешенең характерында һоҡланғыс сифаттар була. Әңгәмәсеңдең берәй матур сифатын тойһаң, был хаҡта уға әйтергә тартынма.***



- Ә һин бар ҡурайға. Әҙәбиәттән үҙаллы уҡып килерһең.

- Уҡыйым, апай. Ике-өс тапҡыр уҡырмын. Мин әҙәбиәтте бик яратам... Тик ҡурайҙа ла өйрәнгем килә.

Мәктәптә директор бүлмәһендә бәхәс бара. Мәктәп комсоргы итеп кемдең кандидатураһын һайларға? Директор менән парторг Мәликә Йософова араһында фекер айырымлығы килеп сыға. Парторг А.И. тигән егетте тәҡдим итә.

- Ундай тиктормаҫ уҡыусы комсорг була алмай. Үтә шуҡ ул. Комсорг булыу өсөн етдилек кәрәк, - тип ҡаршы төшә директор.

- Ә бит һуғышта тап уның кеүек тиктормаҫтар фронт һыҙығының иң алдында барып, атакаларға беренсе булып ташланып, еңеү килтерҙе. Ундайҙар етди эш башҡарғанда етди ҙә була ала, ойоштороу эшенә лә оҫта. Ул бит үҙенән өлкәнерәк кластағы малайҙарҙы ла эйәртә ала. Әйҙәгеҙ, был энергияны, был оҫталыҡты файҙаға борайыҡ.

- Үҙ яуаплылығыҙға алаһығыҙмы?

- Алам. Мин уға ышанам.

Шулай итеп, А.И. мәктәп комсоргы итеп һайлана һәм уҡыусылар араһында эш сағыштырмаса йәнләнеп китә.

Бөгөнгө көндә был егет республика күләмендә билдәле лидер, йәмәғәт эшмәкәре.

"Ҡурай" тигән серле оло донъяға тәүге һуҡмаҡтары шулай башлана танылған ҡурайсы Роберт Юлдашевтың.

Ошо уҡ мәктәптә сираттағы уҡытыусылар кәңәшмәһе. Үтә лә етди мәсьәлә тикшерелә. Бер төркөм уҡыусылар химия кабинетына инеп, тәжрибә яһап маташҡандар, ҡара төтөн сыҡҡан, кабинет ыҫланған. Уларҙың өсәүһен тотоп алғандар һәм берәм-берәм индереп һорау алалар. Директор ғәжәп етди төҫ менән сираттағы көн тәртибен иғлан итә. Тағы шул 9 "А" класы. Тағы улар тынғылыҡ бирмәй, уҡытыусыларҙың һәүетемсә генә эшенә тоткарлыҡ яһай. Мәктәп абруйына тап төшөрә.

Бына кәңәшмә барған бүлмәгә "бола башлаусы"ны саҡырып индерәләр. "...Был малайҙы мин күптән инде СПТУ-ға ебәртер инем. Ул мәсьәләне әлегерәк тә күтәреп сығырға ине иҫәбем, атаһы үлгәс, өндәшмәнем. Ә хәҙер кисектергеһеҙ хәл итергә кәрәк. СПТУ-ға документ әҙерләйек".

"...Сабый менән сабый булырға түгел. Тәрбиәләһендәр СПТУ-ла. Туғыҙынсы класта уҡый, ә аҡыл ултырмай".

Шуның кеүек төрлө фекерҙәр әйтәләр мәктәп уҡытыусылары. Күпселек тауыш менән уҡыусының яҙмышы шулай хәл ителмәксе... Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы Йософова һүҙ һорай.

- Мин ул уҡыусы тураһында бер генә лә насар һүҙ әйтә алмайым, - тип һүҙ башлағас, барыһы ла аптырашып, уға текләп ҡала. - Ул баланың күңеле шул тиклем саф, саф күңелле бала насар булмай. Ярай, аҙыраҡ боҙоҡлоҡ эшләгәндәрҙер. Малайҙар күмәкләшеп алһа, береһенән-береһе уҙҙырып ебәрә ул. Тик ни өсөн кеше яҙмышын шулай еңел генә хәл итмәксеһегеҙ? Һеҙ ни эшләп баланың нисә йәштә, ниндәй хәлдә, ата-әсәһенең ниндәй кеше икәнлегенә аҙ ғына күҙ һалмайһығыҙ? Уның йәшенә ҡайтығыҙ. Үҙегеҙҙең уның йәшендә сағығыҙҙы онотһағыҙ, һис юғы, балағыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Мин һеҙҙең дә балаларығыҙҙы уҡытам бит. Беләм уларҙы ла. Мин был уҡыусының әҙәбиәттән биргән яуаптарын һәр саҡ һоҡланып тыңлайым. Шул тиклем тәрән фәлсәфә ул яуаптарҙа. Әйҙәгеҙ, үҫмер яҙмышына әҙәмсә ҡарайыҡ.

Шулай итеп, ыңғай хәл ителә буласаҡ яҙыусы яҙмышы.

Кешегә ул хәтлем дә изге күңел, кешелеклелек ҡайҙан килә? Нисек тәрбиәләнә?

Бер ни ҙә юҡтан бар булмай, тигән хәҡиҡәт бар. Мәликә Йософованың атаһы Ғибаҙулла Йомағужин белем алыуға сарсап, бәләкәй генә Ҡужабаҡ ауылынан Ырымбурға, унан Бохараға сығып киткән, мәҙрәсәлә иҫ китмәле яҡшы уҡығаны өсөн зирәк егетте Һиндостанға белемен камиллаштырырға ебәрәләр һәм указлы мулла исеме бирәләр. Ғибаҙулла Йомағужинды Ейәнсура яҡтарында әле лә яратып иҫкә алалар. Яңы Себенле төбәгендә оҙаҡ йылдар мулла була ул. Ипле һүҙе, аҡыллы кәңәше менән бик күп кешеләрҙе ауыр ҡайғыларҙан, хатта сирҙәрҙән йолоп алып ҡалған, тиҙәр. Табиплығы менән дан ҡаҙанған башҡа муллалар ҙа булған, әммә халыҡ Ғибаҙулла мулланы әлегәсә теленән төшөрмәй. Сөнки ул изгелекле йөрәге, ғәжәп кешелекле булыуы менән халыҡ хәтерендә уйылып ҡалған. Берәйһе насарлыҡ, йә боҙоҡлоҡ ҡылһа, Ғибаҙулла мулла исеме менән намыҫына тейгәндәр: "Был турала Ғибаҙулла мулла ишетеп ҡалһа, ни тип яуап бирерһең?" - тигәндәр, ә ғәйепләнеүселәр: "Ғибаҙулла муллаға ишеттермәгеҙ - мин төҙәлермен", - тип әйтер булған. Халыҡтың тәрән ихтирамын яулаған мәғрифәтсе, табип, мулла Йомағужиндың кешелеклек сифаттары ҡыҙына, ҡыҙына ғына түгел, хатта ейән-ейәнсәрҙәренә лә күскән.

***Табиплығы менән дан ҡаҙанған башҡа муллалар ҙа булған, әммә халыҡ Ғибаҙулла мулланы әлегәсә теленән төшөрмәй. Сөнки ул изгелекле йөрәге, ғәжәп кешелекле булыуы менән халыҡ хәтерендә уйылып ҡалған. Берәйһе насарлыҡ, йә боҙоҡлоҡ ҡылһа, Ғибаҙулла мулла исеме менән намыҫына тейгәндәр: "Был турала Ғибаҙулла мулла ишетеп ҡалһа, ни тип яуап бирерһең?" - тигәндәр, ә ғәйепләнеүселәр: "Ғибаҙулла муллаға ишеттермәгеҙ - мин төҙәлермен", - тип әйтер булған.***

"Атайығыҙҙың тәрбиәһендә иң иҫтә ҡалырлыҡ һабаҡтары ниндәй булған?" тип һорағас, Мәликә апай ҡыҫҡа ғына итеп: "Ул кешене бер ваҡытта ла кәмһетмәгән, һәр кешенең берәй өҫтөнлөгөн күреп алып, хуплап ебәрә торған булған. Кешенең күңелен үҫтерә белеү үҙе бер талант тыр ул", - тине.

Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы үҙе РСФСР мәктәптәре отличнигы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Тормош иптәше - ун ете йәшенән Бөйөк Ватан һуғышына алынып, Берлинғаса барып етеп, Еңеүҙе түше тулы орден-миҙалдар менән ҡаршылаған, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған юрисы Мөхәммәт Йософов менән өс бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Улдары Ринат - тарих фәндәре кандидаты, республиканың атҡаҙанған фән эшмәкәре, республикабыҙҙа билдәле лә, абруйлы ла ғалим. Археология, антропология өлкәһендә бәхәслерәк мәсьәләләр килеп сыҡһа, кем генә булмаһын, Ринат Мөхәммәт улы Йософовты телгә ала. "Ринат Мөхәммәтовичтан һорағыҙ" йәки "Ринат Йософов шулай тип әйтте", - тип, ғалимдың абруйлы фекеренә һылтаналар. Ҡыҙҙары Рәшиҙә Мөхәммәт ҡыҙы - медицина фәндәре кандидаты, БР-ҙың атҡаҙанған медицина хеҙмәткәре, уның һүҙ кәңәшен, ҡул ярҙамын алмағандар һирәктер. Тағы бер улдары Ришат Мөхәммәт улы Йософов Башҡортостан Республикаһының Мәскәү ҡалаһындағы РФ Президенты эргәһендәге вәкәләтлегендә эшләй.

Мәликә менән Мөхәммәт Йософовтар ғаиләһендә республикабыҙҙың өс атҡаҙанған хеҙмәткәре тәрбиәләнеүенең төп сере - атай-әсәйҙең хеҙмәткә һөйөүе һәм талапсанлығы булһа, барыһында ла ғәжәп изгелекле йөрәк, кешелеклелек быуындан-быуынға күсә килгән, ҡанға һалынған сифат булһа кәрәк.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

## ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

### ҠЫҪТЫБЫЙ



Һөткә сама менән тоҙ, он һалып, ҡамыр баҫалар, шуны 50-шәр грамм үлсәм менән өлөштәргә бүләләр ҙә, йоҡа йәймәләр йәйеп, ҡоро табала бешерәләр. Тары ярмаһын һөттә бешереп алғас, әҙер йәймәнең ярты өлөшөнә ошо бутҡаны һалалар ҙа икенсе яғы менән ҡаплап ҡуялар. Тышына эретелгән аҡ май һөртөп ебәрһәң, бына тигән ризыҡ әҙер ҙә була.

Ҡыҫтыбыйҙы төйөлгән картуф һәм ҡыҙҙырылған һуған һалып та бешерергә була. Тары ярмаһы бутҡаһына ҡабаҡ, йәки ваҡ итеп туралған кәбеҫтә ҡушып бешерһәң, ризыҡ тағы ла үҙенсәлеклерәк, тәмлерәк килеп сыға.

**Ҡамыр өсөн: 15 г һөт, 35 г он, 1 г тоҙ кәрәк. Эслек бутҡаһы өсөн: 50 г тары ярмаһы, 160 г һөт, 2 г тоҙ, 20 г аҡ май алына.**

### ӨЛӨШ

Ҙур ғына өлөш итте тоҙ һәм тәмләткестәр менән бешереп алалар, шуны тура мөйөш формаһында 50 грамлы өлөштәргә бүләләр. Ит һурпаһында уртаға ярылған картуф, дүрткә бүленгән кәбеҫтә, арҡыры туралған кишер бешерәләр.

Тәрилкәгә иң тәүҙә йәшелсә һәм ит һалып, өҫтөнә дүңгәләкләп киҫелгән сей һуған һибәләр. Шуға 50 грамм һурпа өҫтәп, табынға ҡуялар.

**Әҙерләү өсөн: 220 г һимеҙ һарыҡ ите, 70 г картуф, 65 г кишер, 70 г кәбеҫтә, 40 г башлы һуған, 10 г аҡ май, 50 г һурпа.**




### УРАЛСА ЩИ



Арпа ярмаһын таҙартып, йыуып, ҡайнаған һыуға һалалар һәм 1-2 сәғәт бүрттерәләр (әгәр ҙә ярманы һурпаға һалһаң, ул лайлалы, йәбешкәк һәм күкһел төҫтә була). Ҡайнаған һурпаға иң тәүҙә бешкән ярма һалып, һикертеп ҡайнатып сығаралар. Шуға йәшелсәләр менән быҡтырылған кәбеҫтә һалып, 10-15 минут ҡайнаталар, унан һуң аш тәмләткестәр ҡушып, иң аҙағында ваҡ ҡына итеп туралған йәки ҡырғыстан үткәрелгән һарымһаҡ өҫтәйҙәр. Уралса щи бешергәндә арпа ярмаһы урынына тары, геркулес, йә һоло ярмаһы һалырға була.

**Әҙерләү өсөн: 10 г кәбеҫтә, 143 г тоҙло кәбеҫтә, 25 г кишер, 25 г башлы һуған, 25 г томат, 2 г һарымһаҡ, 10 г май, 10 г ҡаймаҡ, 425 г һурпа йәки һыу.**

## УҢЫШ ҠАҘАН

# Кешеләрҙе ярат

**Был тормошта уңыш ҡаҙаныу өсөн моғайын дуҫтар, фекерҙәштәр һәм эштәге коллегаларыңдың да кәрәклеген белмәйһегеҙҙер? Ысын, бүтән кешеләр ярҙамы менән дә бына тигән уңышҡа өлгәшеп була. Дөм урманда бер үҙе йәшәгән кеше билдәлелек яулай аламы? Юҡ, әлбиттә. Шуның кеүек, дуҫ-иштәренең ярҙамын тоймаған кеше лә уңышҡа өлгәшә алмай. Бөтөн ғиллә кешеләр менән ҡыуанып, уларҙы яратып, яҡшы мөғәмәлә итеүҙән тора. Әммә был кемделер һиңә кәрәкле эште эшләргә мәжбүр итеү, тигәнде аңлатмай. Тормошобоҙҙағы бик күп шатлыҡлы ваҡиғалар дуҫтарыбыҙ ярҙамынан барлыҡҡа килә.**

Кешеләр менән аралашыуҙың иң яҡшы ысулы - уларҙы ысын күңелдән ратыу. Һәр кешенең характерында һоҡланғыс сифаттар була. Әңгәмәсеңдең берәй матур сифатын тойһаң, был хаҡта уға әйтергә тартынма. Уның йөҙө балҡып китәсәк. Мәҫәлән, минең эштә яҡын күргән бер коллегам бар һәм уға ҡасан ғына, ниндәй генә мәсьәлә буйынса мөрәжәғәт итмәйем, һәр саҡ ярҙам итә. Кешене маҙаһыҙламай, уға яҡшы мөғәмәлә күрһәтә белгәндә генә уның ярҙамын алып, яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшеп була. Кемдеңдер көсөнә таянырға уйлаһаң, уға ҡарата һәр саҡ яҡшы мөнәсәбәттә бул, бигерәк тә башҡа берәүҙең рухи ярҙамына мохтаж булған сағында күңелен үҫтерерлек яҡшы һүҙҙәреңде йәлләмә.

Билгән урынына, дәрәжәһенә ҡарамай, бөтөн кешеләр менән дә уртаҡ һүҙ таба белгән бер эшҡыуарҙы беләм. Унан, һин быға нисек өлгәшәһең, тип һорағайным, "Мин өс ҡағиҙәне файҙаланам", тип яуап ҡайтарҙы.

**Беренсе ҡағиҙә.** Насар кешеләр булмай. Тик беҙҙең аралашыу даирәһенән ситтә ҡалғандар ғына бар.

**Икенсе ҡағиҙә.** Кабинетҡа инерҙән алда уҡ осрашыуҙан ниндәй һөҙөмтә алырға теләүемде уйлап ҡуям һәм үҙ теләгемә өлгәшмәйенсә, һис юғында, шул хаҡта фекер алышыуҙар башламайынса, урынымдан ҡуҙғалмайым.

**Өсөнсө ҡағиҙә.** Һәр саҡ кешенең характерында ыңғай һыҙаттар табам һәм был хаҡта уны тәү күргәнемдә үк үҙенә әйтәм.

Яҡшы һүҙ - йән аҙығы, яҡшы мөғәмәлә таш йәнде лә иретә. Аңлауыңса, кешеләр үҙҙәрен яратҡан кешеләрҙе ярата, улар терәк-таяныс булыр тип тырыша һәм ҡулынан килгәнсе ярҙам итә. Иң мөһиме - кешеләрҙе ярата бел.

***✓ Әгәр ҙә кемдер белем тауының иң юғарғы баҫҡысында торам, тип иҫәпләй икән, тимәк, ул әле белем тауының иң аҫҡы баҫҡысында ғына.***

**(Солонон Рысинский).**



## ҺӨЙӨҮ ҺҮҘЕ

# МӨХӘББӘТҺЕҘ КЕШЕ ЯРТЫ,

## ысын кеше - ғашиҡ кеше...



### Һөйөү йыры

Йәшлек дәртем шашып,
янып-ярһып,
Зәңгәр каяларға уҡ аттым.
Һине таптым, әммә
һакламаным,
Атҡан уғым һымаҡ
юғалттым.

Уғым осто алыҫ-
алыҫтарға,
Йәйәләрем ҡалды иңемдә.
Һинең ҡараштарың
яралаған
Яраларым ҡалды күңелдә.

Атҡан уктар кире
ҡайтмағандай,
Кире ҡайтмаҫ кеүек инең
һин.
Ҡайтмаҫ уғым кеүек
юғалһаң да,
Яңы таңым булып килдең
һин.

Йәйәләрем иңдә, һин -
эргәмдә,
Уңалдылар инде яралар.
Йөрәктәге һөйөү яраларын
Бары һөйөү генә дауалар.

Рауил ШАММАС.

* * *

Һөйөү мине урап үтер,
Ситләп үтер, тигәйнем дә.
Бөтәһенә күнеп бөтөп,
Башым баҫып
килгәйнем дә.

Ниһайәт, мин ғашиҡ
булдым,
Бар донъяға етте уты.
Тәндә балҡытырға
мөмкин,
Шәмдәй итеп мине тотоп.

Мин өлгөрҙөм, һуңлай
күрмә,
Һөйөүеңә ашыҡ, кешем.
Мөхәббәтһеҙ кеше ярты,
Ысын кеше - Ғашиҡ Кеше.

* * *

Минең күңел булһын,
типме,
Һин тамсылап эстең
шарап.
Балҡыныҡ һин әллә ниҙән,
Әллә шул тамсыға ҡарап.

Мин иҫерҙем һин
балҡыуҙан,
Мин иҫерҙем эсмәйенсә.
Онотмамын ул балҡышты,
Был донъянан ҡусмәйенсә.

Мин шул кисте иҫкә алам,
Әллә ниҙәр кисергәндә;
Эскән сакта айныганда,
Эсмәйенсә иҫергәндә.

Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ.

### Арыған тән

Кис.
Булмәлә
икәү генә,
Икәү генә! Ҡалған инек.
Сәләмәт түгел сәбәп
табып,
Ишеккә бик һалған инек.
Эстек шарап.
Иҫермәнек.
(Ғәжәп хәлдәр була
бит ул!)
Хыялдарын ысынбарлык
Шулай еңел боҙа бит ул.
Һүҙ һөйләштек.
Һүҙҙәребеҙ
Һулпән янған усаҡ ине.
Йәшерәп кенә иҫнәүҙәрең
Йөрәгемә бысаҡ ине.
Бер сынаяҡ төшөп китте,
Ярсыктарын йыйған
булдыҡ.
Бер пластинка.
Ул яғын да,
Был яғын да ҡуйған
булдыҡ.
...Тән арыны, йонсоно һәм
Тау артына табан шылды,-
Барыһы ла аңлашылды.
...Ә күңелдә, кем
әйтмешләй,
Моңһоу ғына бер йыр
ҡалды.

Буранбай ИСҠУЖИН.

### Билбау

Һинән бары билбау ҡалған -
Күлдәгеңдең билбауы.
Шул билбауҙы һыйпай-
һыйпай
Йығылып ятып илауым.
Йығылып ятып илауым да,
Әллә ниҙәр уйлауым...
Әллә ниҙәр уйланым да,
Үҙемдең осто ҡотом.
Юрый уны ҡалдырҙыңмы?
Әллә микән онотҙоң?
Ах, әгәр ҙә белһәң, шул
мәл,
Шик-шөбһәле уйҙарымдың
Йөрәкте яндырғанын.
Әнәне лә алғанһың бит,
Ә бауҙы ҡалдырғанһың...
Һинең мине ҡурәлмауың
Хәтәр микән шул ҡәҙәр?
Нишләр инең икән аҙаҡ,
Мин уйлаған яман уйҙар
Бойомға ашһа әгәр.
Һинең мине ҡурәлмауың
Йыртты шөбһәләр ауын.
Барыһын да асып һалды
Күлдәгеңдең билбауы...
Һин ҡалдырған билбауың.

Ҡол-ДӘҮЛӘТ.

### Аҡҡошом

Аҡҡош булып индең
яҙмышыма,
Аҡҡошлоҡҡа мине илтергә.
Аҡҡош булып ҡанат
бирҙең,
Аҡҡош булып ҡалдың
хәтерҙә.

Һин яҙҙарҙы беҙгә алып
ҡайттың,
Зәһәрлеген ҡыуып аҡ
ҡыштың.
Һиңә ҡарап, күрҙе
башҡалар ҙа
Ниндәй булғанлығын
аҡкоштоң.

Аҡлыҡ, сафлыҡ төҫө булып
ул саҡ
Яҙмышыма килеп индең дә -
Китмәҫ өсөн ҡалдың
күңелемдә,
Аҡкошом, һин миндә
бөгөн дә!

Рауил НИҒМӘТУЛЛИН.

## АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәкикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Бөйөк эштәрҙе

## уйламаҫтан атҡар

Хәүефһеҙлек ҡаһарманлыкты һәм тиҙлекте кәметмәһен өсөн, бөйөк эштәрҙе уйламаҫтан аткарыу кәрәк.

**(Юлий Цезарь).**

Ерҙә кешеләр йәшәгәндә, яманлыҡ та йәшәр.

**(Тацит).**

Закондар үрмәксе ауы һымаҡ: көсһеҙҙе ул тағы ла нығыраҡ бутай, көслө уны өҙөп сыға.

**(Солонон).**

Әйтелгән һүҙ өсөн үкенергә тура килде, әйтелмәгәне өсөн - юҡ.

**(Ксенократ).**

Ни өсөн беҙ техник вуздарҙа материалдарҙың ҡапма-ҡаршылығын өйрәнәбеҙ, ә педагогик уҡыу йорттарында тәрбиә барышында шәхестәрҙең ҡапма-ҡаршылығын өйрәнмәйбеҙ?

**(А. Макаренко).**

Эш урыныңды ваҡытында ҡалдырыу кәрәк. Ижадының һүрәнләнә башлауын тамашасы тоймаҫ элек сәхнәне ҡалдырған балет бейеүсеһе һымаҡ.

**(В. Оствальд).**

Хәл-ваҡиға менән көрәшеүсе уның ҡолона әүерелә.

**(Сенека).**

Өлгөргән еләкте ҡунаҡка ике төрлө биреп була: бысраҡ ҡулдарҙа йә ялтырап торған тәрилкәлә - уларҙың тәме төрлөсә буласаҡ.

**(Леонид Сухоруков).**

Ахмаҡка уның ахмаҡ икәнен хатта аҡыллы ла иҫбат итә алмаясаҡ.

**(Л. Гаврилов).**

Ни тиклем ҡүберәк үҙгәргән һайын, шул тиклем ҡүберәк бөтәһе лә иҫкесә ҡала.

**(Француз мәҡәле).**

Белем аҡылды алыштыра алмай.

**(Пифагор).**

Миңә фабрикамды ҡалдырығыҙ, ә кешеләремде алығыҙ - тиҙҙән фабрика иҙәнендә үлән үҫәсәк. Фабрикаларымды алығыҙ, кешеләремде ҡалдырығыҙ - тиҙҙән беҙҙең элеккеләренән дә яҡшыраҡ фабрикаларыбыҙ буласаҡ.

**(Эндро Карнеги, Америка эшҡыуары).**

Әгәр ҙә кемдер белем тауының иң юғарғы баҫҡысында торам, тип иҫәпләй икән, тимәк, ул әле белем тауының иң аҫҡы баҫҡысында ғына.

**(Солонон Рысинский).**

Һәр насарлыктан ике дарыу бар: беренсеһе - ваҡыт, икенсеһе - өндәшмәү.

**(Француз мәҡәле).**

Аҡылһыҙҙар менән идара итеүгә ҙур аҡыл, наҙандар менән идара итеүгә ҙур белем кәрәкмәй.

**(Эстебан де Эсмир).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Бер сит ил илсеһе Екатерина II шулай тип һорай икән:"Һеҙ, Ғәли йәнәптәре, нисек итеп үҙегеҙҙең тыңлауығыҙ дворяндарығыҙҙы тыңлата алыуға өлгәшәһегеҙ?" Екатерина II шулай тип яуап биргән:"Мин уларҙы бер ваҡытта ла уларға файҙалы булмаған эште эшләргә мәжбүр итмәйем".**

## КЕМ АЛЫҠ?

# РӘСТӘМ САҠЫРА

8 Март байрамы алдынан гүзәлдәребеҙгә бүләк эҙләй башлағанһығыҙҙыр. Һеҙҙең ҡарамаҡка викторина һорауҙары тәкдим итәбеҙ. Уларға яуап биреп, популяр йырсы Рәстәм Ғиззәтуллиндың Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк "Яратам" тип аталған яңы альбомының исем туйы уңайынан байрам концертына саҡырыу ҡағыҙы ота алаһығыҙ.



Әйҙәгеҙ, ашығығыҙ! Яҡындарығыҙҙы билет алып ҡыуандырығыҙ!

**1. Рәстәм Ғиззәтуллиндың йәштәр араһында ҙур популярлыҡ яулаған тәүге йыры?**

**2. Йырсы радио тыңлаусыларға "Юлдаш" каналында барған ниндәй программаларҙың авторы һәм алып барыусыһы булараҡ билдәле?**

**3. Р. Ғиззәтуллин шоу-бизнес өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн ниндәй премияға лайыҡ булған?**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Ошо көндәрҙә Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында йәшәүсе ҡәҙерле әсәйебеҙ **Зәкирә Хәснулла ҡыҙы Солтанголоваға** 90 йәш тула. Әсәйебеҙ 13 йәшендә комсомол сафына алынып, оҙаҡ йылдар колхозда эшләй. Ҡымыҙ һауыу, себеш үҫтереү тиһеңме, баҡсасымы - ҡайҙа ғына эшләһә лә эшен еренә еткереп, яратып башҡара ул. Атайыбыҙ Минивәли Солтанғол улы менән 62 йыл бергә татыу ғүмер итеп, беҙгә, дүрт балаға матур тәрбиә бирҙе улар. Әсәйебеҙ хәҙер хаклы ялға сығып, 30 йылдан ашыу ауыл халкына иман нуры тарата. Ғүмер юлында шатлығын да, ҡайғыхәсрәтен дә, ауырлы-һыҙлауҙарҙы күп кисерһә лә ул һис ҡасан зарланып ултырмай, барына шөкөр итеп, яктылыкка ынтылып, беҙгә рухи таяныс, тормошобоҙҙоң йәме булып йәшәй. Юбилейы менән тәбриклән, әсәйебеҙгә киләсәктә лә ҡоростай сәләмәтлек, ҡыуаныс-шатлыҡтарҙан ғына торған оҙон ғүмер, рух ныҡлығы насип булыуын теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән балалары, кейәү-килендәре, ейәнсәрҙәре исеменән ҡыҙы Рәйлә.**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәррирәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6212
Заказ 983